✓ *Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Мәшәҡәттәр баҫып китмәҫ борон 2011 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 330 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин тора. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №41 (407)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Телебеҙ...**
дәүләт статусында



2

**Тәбиғәтебеҙгә һөжүм...**
рухыбыҙға һөжүм ул



4

**Төньяҡ-көнбайыш диалекты...**
башҡорт теленең айырылғыһыҙ бер өлөшө



8-9

**Яҡшы булырмы, әллә...**
һәр ваҡыттағыса, Рәсәйҙәге кеүекме?



12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Суверенитет яулау йылдары республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихында ниндәйерәк һабаҡтары менән урын алды?

***Рәшит Шәкур, яҙыусы, филология фәндәре докторы:*** 1990 йылдың 11 октябрендә республикабыҙ Юғары Советы, Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеп, Башҡортостан тарихында өряңы битте асып ебәрҙе. Был көндән һуң уҙған ике тиҫтә йыл эсендә беҙ ғәйәт ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы һәм фәһемле юл үттек. Дөйөм алғанда, ул үҫеш, яңырыу һәм бик ҙур үҙгәрештәр дәүере булды. Әммә шул уҡ ваҡытта тотош ил иңенә төшкән, донъяла тиңе булмаған был реформалар дәүере аша үтеү беҙҙең республикабыҙ һәм халҡыбыҙ өсөн дә ҙур һынауға әйләнде. Был һынау хәҙер ҙә дауам итә. Йәғни, реформаларҙың ыңғай яҡтары менән бергә йәнде әсетерҙәй кире яҡтары ла бихисап. Шуның өсөн дә, әгәр ҙә бөгөн суверенитет яулағандан һуңғы йылдарҙағы уңыштарҙы барлау менән бергә, булмышыбыҙҙың теге йәки был өлкәһенә ҡарата тәнҡитле ҡараштар әйтелә икән, был бик тә тәбиғи. Үткәндәрҙе нәҡ шул планда объектив һәм ғәҙел анализлауҙы артабан да дауам итергә кәрәк.

Һүҙ ҙә юҡ, егерме йыл эсендә халҡыбыҙ һәм республикабыҙ, яңы һәм уғата ҡатмарлы шарттарҙа йәшәргә, алға барырға, әленән-әле килеп тыуған проблемаларҙы тыныс һәм айыҡ аҡыл менән хәл итергә өйрәнде. Бына быныһы, минеңсә, иң мөһиме. Беҙ, башҡорттар, нәҡ ошо егерме йыл эсендә үҙ-үҙен, үҙенең эске берҙәмлеген, үҙенең телен, рухын, мәҙәниәтен яҡлай һәм һаҡлай алырлыҡ милләт булараҡ барыбер өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрелә алдыҡ. Беҙ яҙмышыбыҙҙы республикабыҙҙа йәшәүсе бүтән милләт вәкилдәре менән аралашып, аңлашып, республика, Рәсәй закондарын, милләттәрҙең хоҡуҡтарын яҡлаусы халыҡ-ара документтарға таянып хәл итеүгә ынтылдыҡ һәм эшебеҙҙе шул йүнәлештә дауам итәбеҙ. Суверенитет шарттарында яуланған уңыштарыбыҙҙы һәм хәҙер ҙә әленән-әле тыуып торған проблемаларҙы һанап тормайым. Улар бихисап. Беҙ быйыл яңынан ҙур үҙгәрештәр дәүеренә аяҡ баҫтыҡ. Үткән юлыбыҙҙа үкенестәр ҙә аҙ түгел, ул хаҡта ла онотмайыҡ. Үткәндәрҙән һабаҡ алып, хаталарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе төҙәтеп, өмөт һәм ышаныс менән алға табан барырға насип булһын, туғандар!

***Кәҙим АРАЛБАЕВ, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Ошо йылдар халыҡтар араһында берҙәмлек кәрәклеген тағы бер ҡат раҫланы. Ауырлыҡтарҙы еңер, үҙ аллы булып ҡалыр өсөн башҡорт халҡына үҙ-ара ғына түгел, башҡа халыҡтар менән дә берҙәм булыу зарур. Юғиһә, суверенитет мәсьәләһе башҡорт проблемаһы ғына, тип уйларға әҙер ҡайһы бер милләт вәкилдәре. Ул бит башҡорттоҡо ғына түгел, ошонда йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың да уртаҡ проблемаһы. Әгәр беҙ республика булмай, Рәсәйҙең ябай ғына бер субъекты, губернаһы булып ҡалһаҡ, беҙҙең күп ҡаҙаныштарыбыҙ, күп хоҡуҡтарыбыҙ юҡҡа сығасаҡ. Әйтәйек, үҙебеҙҙең герб, флаг, гимн, республика статусы юҡҡа сығыу ғына түгел, ә бөтә яҡтан да тигеҙләү башланасаҡ. Беҙ Калуга, Рязань өлкәләре кеүек булып ҡаласаҡбыҙ. Башҡортостандың республика булараҡ потенциалы ошо 20 йыл эсендә нығ үҫте, уны беҙ һаҡлап ҡалырға һәм киләсәк быуындарға тапшырырға бурыслыбыҙ. Бының өсөн инде халыҡтар берҙәмлеге кәрәк. Берҙәм булғанда, бер-береңде аңлағанда, беҙ бит Башҡортостанда йәшәйбеҙ, тимәк, Башҡортостан Республикаһы өсөн ҡулға-ҡул тотоношоп көрәшергә кәрәк икәнлеген аңлағанда ғына беҙ нимәгәлер өлгәшербеҙ һәм беҙҙең фекергә, беҙҙең һүҙгә үҙәк власть та ҡолаҡ һалыр.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" гәзитенең баш мөхәррире:*** Беҙҙә суверенитетты, ғәҙәттә, заводтар, мәктәптәр, дауаханалар, йорттар төҙөләүе, юлдар һалыныуы кеүек матур үҙгәрештәр менән генә бәйләйҙәр кеүек. Ә бына шул суверенитет һөҙөмтәһендә кеше күңелендә, Башҡортостанға исем биргән халыҡтың күңелендә ниндәй үҙгәрештәр булыуын, унын ниндәй кимәлгә күтәрелеүен уйлағаныбыҙ юҡ шикелле. Иң шатлыҡлыһы шул: халҡыбыҙ вәкилдәре үҙенең кемлеген таный, үҙ тамырҙарын барлай, тарихын өйрәнә, балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ үҙ туған телендә уҡый, һөйләшә. Бына быныһы инде милләтебеҙҙе, республикабыҙҙы артабан да һаҡлап ҡалыуҙың нигеҙе. Был Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә ебәрелгән азат булыу, бойондороҡһоҙ булыу тәғәйенләнеше. Күпме баҫым яһалалар ҙа, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарын күпме язалаһалар ҙа, ҡазалаһалар ҙа, барыбер асылыбыҙға әйләнеп ҡайттыҡ. Беҙ үҙ асылыбыҙға, тамырҙарыбыҙға ҡасан да булһа барыбер ҡайтыр инек, ҡайтырға тейеш инек. Беҙҙең милләт, Әхмәтзәки Вәлиди әйткәнсә, берәү генә ҡалһа ла, аҡтамыр кеүек таралыр, аяғына баҫыр ине. Ә тап 90-сы йылдарҙа үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлап күтәрелеүебеҙ, башҡа милләттәрҙән алда республикабыҙға үҙаллылыҡ яулап, суверенитетлылар сафының алдында барыуыбыҙ - ошо инде егерме йыллыҡ тарихыбыҙҙағы иң ҙур һабаҡ һәм ҡаҙанышыбыҙ.



✓ *Башҡорт теленең, башҡорт һүҙенең, йыһанда яңғыраған аҙан кеүек, бар донъяға барып етеү мөмкинлеге алыуы, һис шикһеҙ, быуаттың, меңйыллыҡтың оло ҡаҙанышы булып һаналырға лайыҡлы.*



ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ РАДИО ҺӘМ ТЕЛЕВИДЕНИЕ

**Совет осоронда Башҡортостан телерадио тапшырыуҙары Үҙәк телерадио каналдарына "ҡыҫтырылып", тәүлегенә 2-3 сәғәтлек өйҙәш программалар рәүешендә генә йәшәне. Ул тапшырыуҙарҙы ла бары тик башҡалабыҙ Өфө һәм уға яҡын булған ҡала-райондар тамашасылары ғына ҡарай һәм тыңлай алды. Ҡасандыр республикабыҙҙың Урал аръяғы, көньяҡ, төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәүселәр өсөн башҡорт телендәге телетапшырыуҙарын ҡарау тик татлы төш кеүек кенә тойола торғайны.**

Бары тик илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа барған үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә генә Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы өйҙәш булыуҙан туҡтап, көнө буйына һәм тәүлек әйләнәһенә тапшырыуҙар алып барыусы үҙаллы берәмеккә әүерелде. Быға, әлбиттә, Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитетын иғлан итеү, президент институтын булдырыу булышлыҡ итте. Донъяның өстән бер өлөшө менән нурҙары тоташҡан йыһан карабы станцияһының бер генә нурын Өфө ҡалаһына йүнәлттерә алыу ҙа Башҡортостан Республикаһы менән Рәсәй Федерацияһы араһында яңыса мөнәсәбәт ҡороу, вәкәләтлек бүлешеү һөҙөмтәһе булды. Ваҡытында бар донъяға башҡорт телендәге тапшырыуҙарҙың барып етеүен аңлаған шәхестәрҙең ҡаһарманлығы ла был. Башҡорт теленең, башҡорт һүҙенең, йыһанда яңғыраған аҙан кеүек, бар донъяға барып етеү мөмкинлеге алыуы, һис шикһеҙ, быуаттың, меңйыллыҡтың оло ҡаҙанышы булып һаналырға лайыҡлы.

Был хәлде хәҙерге йәштәр, бигерәк тә 90-сы йылда тыуғандар әллә ни баһалап та, аңлап та бөтмәйҙәр. Әммә беҙ, совет осороноң телевизор ҡараусылары һәм радио тыңлаусылары, быны яҡшы аңлайбыҙ. Башҡортостан радиоһының һәм телевидениеһының ысын мәғәнәһендәге донъяға тыуыуы ла тап ошо осорҙан башлана. Әйткәнебеҙсә, уға тиклем радиобыҙ менән телевидениебыҙ "үгәй бала" хоҡуғында ине. Ул саҡтарҙа беҙ "Тамыр" студияһы, "Хазина", "Сәләм", "Иләү", "Сәңгелдәк", "Йома", "Йәдкәр", "Ҡуласа", "Бер ауылдың тарихы", "Историческая среда" тапшырыуҙары, "Байыҡ", "Гәлсәр һандуғас" кеүек конкурстар, тәүлек әйләнәһенә һөйләп торған"Юлдаш", "Ашҡаҙар" радиоканалдары хаҡында хыяллана ғына инек. Һис һүҙһеҙ, башҡорт милләте үҙ телендәге телерадио тапшырыуҙарҙы иркенләп ҡарау һәм тыңлау бәхетенә тап суверенитет арҡаһында өлгәште. Хәҙер тәүлек әйләнәһенә барған тапшырыуҙарҙы Башҡортостандың иң төпкөл ауылдарында ла, донъяның башҡа тарафтарында йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә ҡарай һәм тыңлай ала.

Теләгән кеше бөгөн телевидение, радионан теләһә ниндәй нөктәһен баҫып, теләһә ниндәй каналдан рус һәм башҡорт телдәрендә ҡарай һәм тыңлай ала. Минең вә милләттәштәрем өсөн БСТ бирәү генә һәм ул йәшәргә тейеш, ул милләтемдең йәшәйешкә хоҡуғына тиң.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ИШАРА

# АУЫРЛЫҠТЫ КҮТӘРӘБЕҘ,

## ә бына еңеллекте...

**Яңыраҡ Баймаҡ районының II Этҡол ауылында билдәле журналист, крайҙы өйрәнеүсе Азамат Тажетдиновтың яугир ауылдаштары иҫтәлегенә бағышланған "Күңелдәрҙә яра төҙәлмәгән" тигән китабының исем туйы булып үтте. Сарала баш ҡалабыҙ Өфөнән, Сибайҙан һәм башҡа төбәктәрҙән, Баймаҡ ҡалаһы һәм районынан килгән ҡунаҡтар, район һәм урындағы хакимиәт вәкилдәре, ауыл халҡы ҡатнашты. Район хакимиәте һәм Баймаҡ районының Үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре ойошторған был сарала ауылдаштары алдында сығыш яһаусы иҡтисад фәндәре докторы, академик Мазһар Иҫәнбаев: "Халыҡ ауырлыҡты күтәрә, әммә еңеллекте күтәрә алмай. Һуғыш ауырлығын беҙҙең ауыл халҡы лайыҡлы күтәрҙе, әммә хәҙерге тыныс, сағыштырмаса еңел тормошта уның бындай фиҙаҡәрлеге әллә ни тойолмай...", тип белдерҙе.**

Үҙенең ҡыҫҡа ғына сығышында академик беҙҙең милләткә генә түгел, дөйөм кешелеккә хас булған мөһим мәсьәләне күтәрҙе. Ысынлап та, беҙ өҫтөбөҙгә төшкән таштай ауырлыҡты күтәрәбеҙ, ә еңеллек алдында ни өсөн бөлйерәп төшәбеҙ һуң? Әйтергә кәрәк, кисәлә сығыш яһаусы район хакимиәт башлығы Рөстәм Сәйетов, ошо ауылдан сыҡҡан шәхестәр - Башҡортостан ДОСААФ-ы рәйесе генерал-майор Илгиз Таңғатаров, райондың баш табибы Миңлеғәле Ғүмәров, Сибай Яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе, яҙыусы Хәйҙәр Тапаҡов һәм башҡалар үҙ сығыштарында Мазһар Насип улы ҡуйған һорауға яуап эҙләне кеүек. Ә бит, төптән уйлағанда, Азамат Тажетдинов та үҙенең был китабында шул уҡ һорауға яуап бирергә тырыша, улай ғына ла түгел, II Этҡол, Байым, Сәйетбаттал ауылдарынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙәрҙең, тыл ауырлығын үҙ иңендә күтәреүселәрҙең яҙмышын асыҡлау аша беҙгә еңеллек килгәндә лә нисек итеп рух уяулығын һаҡларға кәрәк икәнлегенә ишаралай.

Генерал-майор Илгиз Таңғатаровтың: "Беҙ күберәк тарихты өйрәнеү менән шөғөлләнеп, артҡа ҡараған килеш, алға барырға тырышабыҙ. Мине бына тыуған ауылымдың киләсәге борсой, ауыл халҡына эш урындары булдырмай тороп, ауылды һаҡлап булмаясаҡ", - тигән һүҙҙәре кисәгә килеүселәрҙе һиҫкәндереп ебәрҙе. Дөрөҫ әйтә һымаҡ Илгиз Ғәзиз улы...

**Әммә... Академик Мазһар Иҫәнбаевтың һүҙҙәренә тағы бер әйләнеп ҡайтһаҡ, шул хаҡта ла әйтмәй булмай: кешенең еңеллекте күтәрә алмауы уның үҙ ата-бабаларының үткәнен, үҙ тарихын белмәүҙән дә килә бит. Миҫалға Әхмәтзәки Вәлидиҙе генә алып ҡарайыҡ. Ана ниндәй кисерештәр солғанышында тыуған еренән ситкә сығып киткәндә лә, рух бөйөклөгөн һаҡлап ҡалған ул. Халҡының тарихын яҡшы белгән өсөн...**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ТЕЛЕБЕҘ ДӘҮЛӘТ СТАТУСЫНДА

Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитетын иғлан иткәндән һуң өлгәшелгән уңыштарыбыҙҙың иң кәттәһе, әлбиттә, туған телебеҙҙең дәүләт яҡлауына ирешеүелер. "Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре тураһында"ғы Законы 1999 йылдың 15 февралендә ҡабул ителде. Республикабыҙҙың бындай хоҡуғы иң юғары органдар документтарында ла сағылыш таба. Мәҫәлән, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһындағы 68-се статьяның 2-се пунктында "Республикалар үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы. Республикаларҙың дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, дәүләт учреждениеларында улар Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле менән берҙәй ҡулланыла..." тип әйтелә.

Телебеҙҙең рус теле менән бер рәттән дәүләт теле тип иғлан ителеүе беҙҙең алда бик күп мөмкинлектәр асты. Быларҙың барыһына ла беҙ шаһитбыҙ: республикабыҙҙа етештерелгән тауарҙарҙың ярлығынан башлап һәр өлкәлә, һәр тармаҡта, һәр урында, һәр учреждениела, һәр аулда, һәр ҡалала беҙ туған телебеҙҙең сағылышын күрәбеҙ, яңғырашын ишетәбеҙ.

Был үҙгәрештәр баш ҡалабыҙ Өфө тормошонда ла берҙәй үк сағыла. Мәҫәлән, 7 октябрҙә Республика көнө байрамы саралары сиктәрендә баш ҡалабыҙ башлығы Павел Качкаев Башҡортостан Республикаһы дәүләт телдәре үҫеше һәм уларҙы пропагандалауҙа өлөш индергәне өсөн 80-дән ашыу кешегә традицион йыллыҡ премияларҙы тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында рус, башҡорт һәм туған телдәр уҡытыусылары, балалар баҡсалары тәрбиәселәре, сәнғәт һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, китапханасылар, журналистар һәм ижтимағи ойошмалар вәкилдәре бар. "Киске Өфө" гәзитенән авторыбыҙ Вәлиәхмәт Бәҙретдинов та премияға лайыҡ булды.



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Республика көнө менән ҡотланы. "Был байрам илдә егерме йыл элек башланған ижтимағи-сәйәси һәм иҡтисади үҙгәртеп ҡороуҙар менән тығыҙ бәйләнгән, - тине үҙенең ҡотлауында Президент. - Рәсәй Федерацияһы составында республикабыҙҙың вәкәләттәре киңәйеү менән бергә беҙҙә социаль-иҡтисади үҫеш йүнәлештәрен үҙаллы билдәләү, төбәк закондар системаһын формалаштырыу мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Үҙенең вәкәләттәрен уңышлы атҡарып, Башҡортостан федараль бюджеттың ун донор төбәктәре иҫәбенә инә алды".

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Наркоманлыҡҡа ҡаршы көрәш буйынса ведомство-ара комиссияһы ултырышында ҡатнашты. Билдәләнеүенсә, әле республикала 100 мең кешегә 136,9 наркоман тура килә. Әммә был күрһәткес ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тиҙәр. Йәштәр һәм балалар араһында составында кодеин булған дарыу препараттары, дезоморфин ҡулланыу тарала бара. Әле баш ҡалала наркотик матдәләр ҡулланыусыларҙы тест ярҙамында асыҡлау тәжрибәһе бар. Ошо тәжрибәне республикаға ла таратырға кәрәк, тигән тәҡдим әйтелде ултырышта.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә 2010 йылғы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары яҙыусы Ринат Камалға, композитор Рөстәм Сабитовҡа, фоторәссам Рәмил Килмәмәтовҡа бирелде.

✓2010 йыл өсөн Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге БР Хөкүмәте премияһы лауреаттары билдәләнде. Улар - Мәләүез районы "Көнгәк" гәзите журналисы Лена Абдрахманова, "КоммерсантЪ-Башҡортостан" гәзите хәбәрсеһе Гөлсәсәк Ханнанова, тарихсы-публицист Азат Ярмуллин.

✓Рәсәйҙә көҙгө хәрби саҡырылыш башланды. Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, хәрби хеҙмәткә Рәсәй буйынса 280 мең егет алынасаҡ, был яҙғы саҡырылыш менән сағыштырғанда ун меңгә күп. Башҡортостандан Рәсәй армияһы сафтарына 12360 кеше алынасаҡ, был яҙғы саҡырылышҡа ҡарағанда шулай уҡ күберәк. БР хәрби комиссары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы полковник Илдар Баһауетдинов билдәләүенсә, республикала саҡырылыш ресурстары кәмей һәм хәрби хеҙмәткә алынырға тейешле егеттәрҙең һаулыҡ торошо насарая бара.

*✔ Рәми Ғариповтың ижадын күтәреп алыу, китаптарын сығарыу, уға "халыҡ шағиры" исемен биреү... "Батшаларға башын эймәгәндә, башҡаларға башҡорт баш эймәҫ!" Тағы ла кем шулайтып яҙа алыр ине!*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# БАШҠОРТ РЕНЕССАНСЫ,

## йәки Егерме йылдан һуң иҫтә нимә ҡалған икән?

**Республика көнө менән, йәмәғәт! Һәм дә - Республика Йылы менән! Инде егерме йыл буйына Башҡортостан халҡы 11 октябрҙә айырым бер тойғо, айырым бер хистәр менән ҡаршы ала. Кемдер ҡыуана - ышанам, ундайҙар күпселектер. Башҡорттар, татарҙар, урыҫтар... Кемдер иһә уртын сәйнәй, тешен шығырлата, улар баштараҡ башҡорттарға ҡарата "суверенитет" тигән һүҙҙе ҡабул итә алмай ҡаңғырҙы, хәҙер иһә "Башҡортостан" атамаһынан йөҙҙәре сирыла. Уларҙың милләте лә юҡ. Аңы ла юҡ. Маңҡорттар улар.**

Онотмаһыҙмы, әле генә булған һымаҡ бит - 1990 йылдың 11 октябрендә Өфөлә Башҡортостан Юғары Советының депутаттары Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул иткәйне. Шул ваҡытта бер ҡыҙыу баш егет Рәсәй флагын Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһы башынан бәреп төшөрҙө. Бына бит, ваҡыт тигәнең, үтә лә китә икән. Ижтимағи-сәйәси үҙәк бөгөн - Дәүләт Йыйылышы-Королтай Йорто. Ул Йортта үткән ултырыштарҙа депутаттар тәүҙәрәк суверенитет тураһындағы декларацияға таяныр, үҙаллылыҡтың нигеҙ ташы булып торасаҡ закондар ҡабул иткәйне. Һуңғы арала Үҙәктең ҡыҫымы аҫтында уларҙы һәм, ғөмүмән, суверенитетты юҡҡа сығарҙылар. Ә теге ҡыйыҡтан флагты алып ташлаған ҡыҙыу башты иһә судҡа ла тарттырып маташтылар. Ултыртырға самаланылар, шикелле. Әммә бер нәмә лә килеп сыҡманы. Бөгөн булһамы?

Ә, хәтерләйһегеҙме, көн һайын тиерлек дәррәү күтәрелешеп митингыларға һәм пикеттарға йөрөгән Башҡорт дәүләт университеты студенттарын? Улар бөгөн ҡайҙа икән? Үҙҙәрен суверенитет өсөн көрәш ағзалары тип иҫәпләй микән улар? Хәтерҙәрен яңырталар микән, тимәксемен? Ә Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендәге майҙанда аслыҡ акцияһының ойошторолоуы, ә телеүҙәкте баҫып алыу... Вәт булған бит заманалар! "Йәшлек" гәзитенең беренсе, икенсе һәм хатта өсөнсө бите лә асыйыусылар хаҡында материалдар менән тула торғайны. Хатта Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "Йәшлек"тең ул саҡтағы баш мөхәррире Артур Иҙелбаевты саҡырып алып: "Башҡа темалар юҡмы әллә, өс бит ултырып аслыҡ акцияһы тураһында яҙмаһағыҙ?"-тип ҡаты ғына итеп әйткән, имеш. Булһа булғандыр.

Ә "Йәшлек" гәзитен булдырыу тирәләй ҡупкан шаушыу, бар халыҡ менән бергәләп уны сығарыу өсөн аҡса йыйыу? Бөгөнгө көн менән сағыштырғанда иҫ китмәле тиражы?

Ә "Аҡ тирмә" клубы?...

Уйҙарым болон буйлап уйнаҡлаған йәш ҡолон һымағыраҡ. Үткән осор буйлап тегеләй-былай саба ғына. Тотоп алырмын тимә. Һүҙем нимә хаҡында ине әле? Ә, "Аҡ тирмә" тигәйнем бит. Нефтселәр мәҙәниәт һарайының ҙур залы шығырым тулы була торғайны. Кеше концерт ҡарарға, йыр тыңларға, тип түгел, ә ул ваҡыттағы милли лидерҙарыбыҙҙы ишетергә, күрергә, фекер алышырға, бәхәс ҡororға тип йыйыла ине. Марат Ҡолшәриповтың тарихи сығыштарын, Рәшит Шәкурҙең төплө һүҙҙәрен, Рауил Ниғмәтуллиндың ялҡынлы шиғырҙарын тыңларға тип. Кемделәр атамаһам, ғәфү итерһегеҙ, хәтерем тишек тоҡ кеүек икән, мейелә нығ уйылып ҡалған исемдәрҙе, күңелдә тәрән эҙ ҡалдырған ваҡиғаларҙы ғына килтерен сығара. Исмаһам, көндәлек алып бармағанмын, тип үкенеп ҡуям хатта.

Баҡһаң, егерме йыл үтеп тә киткән. О, ул заманалар, о, ул көндәр! Иҫ китмәле саф һауа һәм баштарҙы әйләндерерлек иҫерткес азатлыҡ тойғоһо! Магазиндарҙа аҙыҡ-түлек, хатта бала-сағаның ойоктары талон менән генә булғанында эшебеҙ юҡ. Өфөлә крандарҙан һыу урынына фенол аҡҡанына иғтибар итмәйбеҙ. Ираклек һәм хөрлөк тойғолары солғап алған ине халыҡты.

Рәми Ғариповтың ижадын күтәреп алыу, китаптарын сығарыу, уға "халыҡ шағиры" исемен биреү... "Батшаларға башын эймәгәндә, башҡаларға башҡорт баш эймәҫ!" Тағы ла кем шулайтып яҙа алыр ине!

Юғалған, тыйылған исемдәр, шәхестәр күпләп асылды. Муса Мортазин, Зәки Вәлиди, Шәйхзада Бабич, Ғәлимйән Таған... Баҡһаң, Салауат Юлаевтан башҡа ла ғорурланырлыҡ, ауыҙ тултырып һөйләрлек шәхестәребеҙ байтаҡ икән. Үҙебеҙҙең эмигранттарыбыҙ ҙа булған да баһа.

Быға тиклем ябыҡ һаналған тарих биттәрен асыуға өлгөштек ул саҡта. Сәйәси золом утында янғандарҙың ҡуҙы һаман эҫе булған икән, халыҡтың хәтерен өтөп алды.

Китап сыҡты шул йылдарҙа. Ундайҙы тәүгә уҡырға тура килгәйне. Әҡрәм Бейештен "Башҡорттарҙың боронғо тарихы һәм азатлыҡ өсөн көрәше" ул ваҡытта һәр бер башҡорттоң китап кәштәһендә булғандыр. Күптән түгел ишетәм, ул китаптағы мәғлүмәт ҡульяҙмалағының өстән бер өлөшө генә булған икән.Бына шул ҡульяҙманы табып алып, бөгөн ҡабаттан тулыһынса баҫтырып сығарырға ине. Эх, хыялдар!

Ә 1992 йылдың март аҙағы? Мәскәү Кремлендә Үҙәк етәкселек, Борис Николаевич Ельцин, йәғни, төбәктәр башлыҡтары менән Федератив килешеүгә ҡул ҡуя. Чечня президенты Джохар Дудаев һәм Татарстан башлығы Минтимер Шәймиев уға ҡул ҡуймыуҙан баш тарта. Башҡортостан үҙенең Ҡушымтаһын тәҡдим итә. Икенсе көндө үк "Йәшлек"тең беренсе битендә әсе карикатура донъя күрә. Дудаев менән Шәймиев "суверенитет" исемле поезға ултырып, ҡуҙғалып китеп бара. Күрәһең, "Үҙаллылыҡ" тип аталған яҡты киләсәккә. Ә беҙҙең ул саҡтағы башлығыбыҙҙың елкәһенә Борис Ельцин менеп ҡунаҡлаған. Эй, заманалар! Дудаев ҡайҙа ла, Шәймиев менән Рәхимов ҡайҙа? Борис Ельциндың "күпме кәрәк, шул хәтлем алырға мөмкин булған суверенитетын" чечендарҙан ҡан ҡоҫторop кире ҡайтарып алдылар. Татарҙар һәм беҙ ениләрәк ҡотолдоҡ. Әммә барыбер йөрәк әрней. Шул ваҡытты иҫкә алһаң, һулҡылдап, тулап ала.

Тағы ла нимә ҡалған икән хәтер һандығында?

Татар телле гәзиттә йырҙарын бар халыҡ яратып йырлаған билдәле бер композиторыбыҙҙың үпкәсел хаты ла бар унда. Саңғы ботинкаларында йөрөгәне өсөн башҡорттарҙы гәйепләп, нимәгә иреште икән ул? Дөрөҫ, йырҙары һаман яңғырай уның - радионан да, телевизорҙан да, халыҡ та мәжлестә яратып йырлай. Беҙ бит үпкәсел, кенә ҡыуыусы халыҡ түгел.

Иҫкә ҡапыл ғына үҙҙәрен "оппозиция" тип атап йөрөткәндәр төшә. Суверенитет иғлан иткәндән алып улар йәнде көйҙөрҙө, башты ҡаңғыртты, аптыратты. Рәфис Ҡадиров һәм "Восток" банкыһы булды тәүҙә. Бик күптәрҙең аҡсалары һәм ваучерҙары шул төпһеҙ ҡоҙоҡта батып юҡҡа сыҡты. Шунан Аринин тигәне килеп сыҡты. Үҙенең "Отечество" тип аталған ҡағыҙ киҫәге менән халыҡтың башын бутап йөрөнө. Президент булырға ынтылғайны. Әле ҡайҙа икән? Ғөмүмән, Башҡортостан менән идара итергә маташыусылар күп булды. Веремеенко, Сафин фамилиялары иҫкә төшә. Әммә уларҙың барыһының да ниәттәре тормошҡа ашманы. Исмаһам, шуның өсөн булһа ла Рәхимовты ихтирам итергә тейешбеҙҙәр ҙә инде.

Гимныбыҙ, Гербыбыҙ, Дәүләт флагыбыҙ булдырылды бит әле. Ғәжәп, йылын хәтерләмәйем. Әммә улар тирәләй ҡупкан бәхәстәр иҫтә. Кемдер башҡорт милли биҙәген тәҡдим итте, кемдер тағы ла ниндәйҙер символдарҙы, әммә Салауат Юлаевтың һәйкәле өҫтөнлөк итте. Гимндың һүҙҙәре менән бигерәк оҙаҡ маташтыҡ.

1995 йылдың 1-2 июне. Ифрат матур, ҡояшлы салт аяҙ көн ине ул. Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үткән көн. Унан һуң икенсе ҡоролтай булды, өсөнсөһө... Дүртенсеһенә ҡайҙа һәм ҡасан йыйылырбыҙ икән? Йыйылырбыҙ микән?

"Аманат" тип аталған үҙебеҙҙең ансамблебеҙ килеп сыҡты ул йылдарҙа. Бөгөн һәр башҡортҡа (һәм башҡортҡа ғына түгел) билдәле булған егеттәребеҙ - Алмас һәм Илдар Ғафаровтар Рәмил Иҡсанов, Урал Иҙелбаевтар башлап ебәрҙе ул эште. Шунан "Караванһарай", "Дәрүиш", "Диуана", "Урал моңо" фестивале, "Һылыуҡай" гүзәллек бәйгеһе, Башҡорт йәштәре көндәре - гүйә оҙаҡ йылдар буйына сүллектә сарсап йөрөгән халыҡ рәхәтләнеп башҡортса йырланы, башҡорт бейеүҙәрен бейене, ҡурайға моңланды, таланттарға һоҡланды. Көн һайын тиерлек яңы башҡортса гәзиттәр асылды, журналдар барлыҡҡа килде. "Йәншишмә", "Аманат", "Аҡбуҙат", "Шоңҡар" - халыҡ уларҙы алдырҙы, уҡыны, йыйып барҙы. Ә "Юлдаш" радиоһы? Ул бит үҙе бер шатлыҡ булды. Иртәндән алып ҡара төнгәсә моңобоҙ беҙҙең менән бергә булды.

Милли яңырыу, башҡорт Ренессансы, тип атарға булалыр ул замананы, үткән егерме йыллыҡты.

Алдағы осорҙо балаларыбыҙ һәм ейәндәребеҙ нисек атар икән, ә, йәмәғәт?

**Таһир ИШКИНИН.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Минең сайтым барлыҡҡа килде: www.ishkinin.net Инегеҙ, уҡығыҙ, фекерҙәрегеҙҙе яҙығыҙ, адрестарығыҙҙы ҡалдырырға онотмағыҙ, һәр берегеҙгә яуап бирергә тырышырмын.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Президенты ҡарамағындағы Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге БР-ҙың Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһына дәғүә итеүсе эштәр 2010 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем ҡабул ителә.

✔Суверенитет йылдарында Башҡортостан Республикаһы ҡулланыусыларҙы газ менән тәьмин итеү, яңы селтәрҙәр һалыу буйынса байтаҡ эштәр эшләнде. Бөгөн газ республикала дөйөм алғанда 77,59 процентҡа үткәрелгән, шул иҫәптән ауылдарҙың 61,21 проценты "зәңгәр яғыулыҡ" ҡуллана. 2006 йылдан 2009 йылға тиклем 27 ауылға газ индерелә, ауыл-ҡасабалар эсендә 259 км торба һалына, социаль объекттарҙы һәм 5943 өйҙө йылытыу өсөн 24 ҡаҙанлыҡ сафҡа индерелә. Ошо көндәрҙә Балтас районында ике йүнәлештә газ үткәреү тамамланды. Киләһе йылға Ейәнсура районында Үрге Муйнаҡ - Өмбәт, Күгәрсен районында Крәүле - Илюшкин - Яңы Троицк - Павловка - Арыҫлан - Әмекәс ауылдары ла газлы буласаҡ.

✔Егерме йыл эсендә республика автомобиль, тимер юлы, авиация, йылға һәм торба транспортының тармаҡлы селтәренә эйә булды. Дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль магистралдәре буйынса Башҡортостан илдә беренсе урында тора. Был - 25 мең километр юлдар, шуларҙың 500 километры - федераль юлдар. Барлыҡ ҡалалар һәм район үҙәктәре үҙ-ара һәм баш ҡала менән асфальт трассалар менән тоташҡан. Дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль магистралдәренең ҡаты ҡатлам менән ҡапланған тығыҙлығы - мең квадрат километрға 155 километр. Был Рәсәйҙәге уртаса күрһәткестән биш тапҡырға юғары. Һуңғы йылдарҙа ғына Башҡортостанда дөйөм ҡулланылыштағы 1420 километр автомобиль юлы сафҡа индерелгән, ауылдарҙа 460 километр юл асфальтланған. Дөйөм оҙонлоғо 7,8 километр булған 140 күпер төҙөлгән.

✔Рәсәй Хөкүмәте киләһе йыл бюджетын ҡараны. Уға ярашлы, Хөкүмәт киләһе йылда пенсия түләүҙәренә 4,7 трлн һум аҡса тотонмаҡсы. Һөҙөмтәлә хеҙмәт пенсиялары буйынса пенсия 1 февралдән 8 процентҡа артасаҡ. Уртаса хеҙмәт пенсияны 8800 һум буласаҡ. Ә йәш әсәләргә бала тапҡандан һуң бер тапҡыр түләнгән пособие 1 ғинуарҙан 11 мең 700 һум тәшкил итәсәк. Әсәлек капиталы күләме шулай уҡ йыл һайын индексацияланасаҡ һәм киләһе йылдан ул 365 мең 700 һумғаса етер, тип көтөлә.

## ЕТЕ РАЙОН

**Совет.** 5-20 октябрҙә Йәш техниктар станцияһында райондың дөйөм белем биреү мәктәптәре һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары уҡыусыларының "Минең Республикам, минең тыуған крайым" тип аталған, Республика йылына арналған фотоконкурсы үтә. Уға 20х30 форматында төҫлө фотолар тәҡдим итеү шарт. Фотоларҙың артына уның исемен, автор, етәксе тураһында мәғлүмәт, бәйләнеш телефонын яҙырға кәрәк.

**Дим.** 11 октябрҙә көндөҙгө 12 сәғәттә Мәҙәниәт һәм ял паркында Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүенең 20 йыллығына арналған байрам саралары ойошторола. 12 октябрҙә 25-се китапханала "Мин- патриот һәм быны менән ғорурланам" тигән конкурс программаһын үткәреү планлаштырыла.

**Калинин.** "Беренсе май" универмагы алдындағы майҙанда хеҙмәт ҡануниәте мәьсәләләре буйынса мәғлүмәт-консультация пункты эшләне. Ул Башҡортостан Республикаһы Профсоюздары Федерацияһы советы президиумы ҡарарына ярашлы ойошторолдо.

**Киров.** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында райондың Республика көнөнә арналған тантаналы йыйылышы үтте. Хакимиәт башлығы Салауат Сәғитов районды ҡаҙаныштарын барлап, быйыл уның ойошторолоуына 75 йыл тулыуын һәм бөтә нәмә халыҡ өсөн эшләнеүен билдәләне. Сарала иң әүҙем хеҙмәткәрҙәр Маҡтау ҡағыҙҙары, Рәхмәт хаттары менән бүләкләнде.

**Октябрь.** 8-10 октябрҙә "Трамплин" спорт-һауыҡтырыу комплексында Республика көнөн байрам итеү сиктәрендә саңғыларҙа трамплиндан һикереү һәм саңғы икеалышы буйынса Асыҡ чемпионат һәм Башҡортостан Республикаһы беренселеге үтә. Унда күрше төбәктәрҙән дә киләсәктәр. Барлығы иң көслө 200 спортсының ҡатнашыуы көтөлә.

**Орджоникидзе.** 11 октябрҙә Орджоникидзе исемендәге майҙанда Республика көнөн байрам итеү сиктәрендә "Данлан, Башҡортостан!" тип аталған байрам программаһы ойоштороласаҡ. Сара иртәнге 11-ҙән киске 5-кә тиклем дауам итәсәк. Майҙанда шулай уҡ байрам сауҙаһы ла гөрләйәсәк.

**Ленин.** Мәскәү дәүләт һыу транспорты академияһының Өфө филиалында 1-се курс курсанттарының ант ҡабул итеү тантанаһы үтте. Был уҡыу йорто - республикала йылға флоты белгестәрен әҙерләүсе берҙән-бер белем усағы һәм уның абруйы йылдан-йыл үҫә. Быйыл курсанттар республиканан ғына түгел, илдең башҡа төбәктәренән дә йыйылған.

## ИҪ КИТКЕС!

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘГӘ ҺӨЖҮМ...

## рухыбыҙға һөжүм ул



**Август аҙаҡтарында Магнитогорск ҡалаһының "Леший" тип аталған юлһыҙ урындарҙа йөрөүсе автомобилдәр клубы ағзалары башҡорт халҡының изге тауы Ирәмәл түбәһенә менеү буйынса ике тиҫтә "джип"та ярыш үткәрергә планлаштырғайны. Был ҡырағай планды тормошҡа ашырыу маҡсатында клуб ағзалары Учалы районы яғынан ағастарҙы ҡырҡып, ярынты һалған да булған.**

Әммә был турала Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовҡа билдәле булды. Уның тарафынан был сара кисектерелде, йәғни Ирәмәлдә бындай ярыштар үткәреү ҡәтғи тыйылды. Клуб ағзалары Президенттың был тыйыуын ҡабул иткән һымаҡ та булғайны. Әммә... Сентябрь аҙағында клуб ағзалары Әүәлек һырты аша үтеп, юлда тиҫтәләгән ҡырмыҫҡа ояларын туҙҙырып, ваҡ ҡыуаҡлыҡтарҙы тапап, тау түбәһенә күтәрелде. Улар ике түбә араһындағы биләндә реликт тундраһын тәрән бураҙналар һалып вәхшиҙәрсә тапап үтте. Шул уҡ ваҡытта Төләк ауылы яғынан Ирәмәлгә квадроциклдарҙа башҡа дыуамалдар ҙа менә. Тау автодромға әйләнә.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Магнитогорск ҡалаһы туристарының джиптарҙа Ирәмәл тауына сәйәхәт яһау фактына ризаһыҙлығын белдерҙе.

-Изге тауыбыҙға автомобиль "экскурсияһы" фактын миндә сикһеҙ аптырау тыуҙырҙы, - ти Рөстәм Хәмитов. - Уларҙың уникаль тәбиғәт территорияһынан джиптарҙа үтеүен, быны өсөн ҡурсаулы урманда юл һалыуын мин ысын ҡырағайлыҡ, тип иҫәпләйем. Республиканың тәбиғәтте һаҡлау органдары бындай "туристар"ҙың эшмәкәрлегенә хоҡуҡи баһа бирергә бурыслы. Мин, республика Президенты булараҡ, ҡала һәм район хакимиәттәре етәкселәренән ҡурсаулы тәбиғәт территорияларына ҡарата бындай эштәр эшләнеүенә юл ҡуймаҫҡа саҡырам һәм уларҙан изге урындарыбыҙға һаҡсыл ҡараш булдырыуҙы талап итәсәкмен.

2010 йыл башында БР Хөкүмәте "Ирәмәл" тәбиғи паркы булдырыу тураһында ҡарар сығарғайны. Яҡын арала ошо парк өсөн аҡса бүленеп, Ирәмәл һәм уның тирә-яғы һаҡ аҫтына алынмаһа, тәбиғи хазинабыҙ ҡырағай туристар тарафынан юҡҡа сығарыласаҡ.

**ҒӨМҮМӘН...**

**Беҙ бөгөн тәбиғәтебеҙгә - йылғаларыбыҙ, күлдәребеҙ, тауҙарыбыҙ, иң мәшһүр ҡомартҡыларыбыҙға ҙур ҡурҡыныс янауына шаһитбыҙ. Быны нисәмә йылдар инде Ирәмәлде һаҡлау тураһында саң ҡаҡыла. Сәнәғәтселәрҙең Ишембай районындағы Торатау һәм башҡа шихандарға яҫҡыныуы шулай уҡ йәмәғәтселекте әленән-әле акциялар, пикеттар ойошторорға мәжбүр итә. Был һөжүм һуңғы арала айырыуса көсәйеп китте, "Сода" етәкселәре үҙәк гәзиттәрҙә сығыш яһап, Стәрленең бер нисә мең кешеһе эшһеҙ ҡалыуы менән ҡурҡытып, үҙенең ниәтен бойомға ашырыуға ерлек әҙерләй башланы. Шул уҡ ваҡытта ошо уҡ етәкселәр предприятие өсөн сеймалдың альтернатив варианттарын ҡарау тураһында уйларға ла теләмәй. Сөнки Торатау ҡул аҫтында ғына бит, артыҡ сығымдар түгәһе түгел. 250 млн йыл торған тауҙы 25 йыл эсендә юҡ итеү - Хоҙай Тәғәлә алдындағы оло гонаһ булыуын иманһыҙҙар уйлай буламы ни инде!**

**Кесаҙна көндө Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Ишембай районында булғанда күңелде йылытыр һүҙ әйтте: "Торатауҙы һаҡлап ҡалырға кәрәк!" Иншалла, республика башлығының был һүҙҙәре тормошҡа ашһын! Тормошҡа ашасаҡ, Алла бойорһа!**



## ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# БАШҠОРТ БАЛЫ КОСМОСҠА ОСТО

Осоусыларға тәғәйенләнгән өҫтәмә туҡланыу рационына үҙебеҙҙең башҡорт балын индереүҙәре тураһында белә инегеҙме? "Башҡорт балы" фәнни-етештереү ойошмаһы бына инде һигеҙенсе йыл рәттән бөтә донъя космос станцияһын башҡорт балы менән тәьмин итә.

Осоусыларҙың сәйенә тәмләткес булараҡ бирелгән татлы аҙыҡ - "Шүлгән таш" ҡурсаулығындағы солоҡ ағастарына ғына оялай торған ҡырағай ҡорт балы. Әле был программа бик уңышлы эшләп килә. Сәскәләрҙең һеркәләренән йыйып, бал ҡорттары тарафынан бер-нисә тапҡыр эшкәртелгәс кенә ҡулланыуға әҙер булған сифатлы балдың кеше һаулығына яҡшы йоғонтоһо күптән билдәле. Бигерәк тә оҙайлы осоштарҙан һуң реабилитация үткән космонавтар өсөн кәрәкле дауа ул.

Ғөмүмән, үткән егерме йыл эсендә халҡыбыҙ бик күп кәсептәренә йән өрҙө, күп һөнәрҙе терелтте. Шулай уҡ ғүмер буйы тормошоноң айырылғыһыҙ кәсебе булған умартасылыҡты өр-яңынан аяҡҡа баҫтырҙы. Ә Бөрйәндә генә һаҡланып ҡалған солоҡсолоҡ иһә яңыса балҡыш алды. Халҡыбыҙҙың иң боронғо шөғөлдәренең береһе булған солоҡсолоҡтоң заман менән бергә атлауы, хатта алдынғы технологиялар заманында ла актуаллеген юғалтмауы был тармаҡтың артабанғы үҫешенә булышлыҡ итәсәк, иншалла.

Арабыҙҙа ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән кешеләр бихисап булыуы ҡыуандыра. Һаулыҡҡа файҙалы, дарыу препараттарынан айырмалы рәүештә төмлө булыуын иҫәпкә алып, шундай һығымтаға киләһең: был һөнәр йылдар шауҡымы, тормош ыңы-зыңыһы арҡаһында ғына юғалып, онотолоп ҡала торған әйбер түгел. Башҡорт балы илдәр генә гиҙмәй, ул - йыһан гиҙә!

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓12-21 октябрҙә Өфөлә халыҡтың социаль яҡтан аҙ яҡланған ҡатламы өсөн "Социаль шылтыратыу" акцияһы үткәрелә. Шул көндәрҙә 16-17 сәғәттәрҙә 223-22-11 телефоны буйынса граждандарҙың һорауҙарына психологтар, психотерапевтар, юристар, республика министрлыҡтары һәм ведомстволары белгестәре яуап бирәсәк.

✓Өфө Республика көнөн байрам итергә әҙерләнә. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев журналистар менән матбуғат конференцияһында байрам сараларына әҙерлек барышы тураһында ла һөйләне. Шулай итеп, 11 октябрь көнө ҡалабыҙҙа байрам саралары түбәндәгесә тәртиптә үтәсәк: 11 сәғәттә Дуҫлыҡ Монументына сәскәләр һалыу, 16 сәғәттә В.И.Ленин исемендәге майҙанда "Йөрәгем һиндә, гәзиз Башҡортостаным!" исемле байрам программаһы һәм 22 сәғәттә фейерверк буласаҡ.

✓Уҡытыусылар көнө уңайы менән ойошторолған тантаналы кисәлә "Мәғариф" милли проекты еңеүселәре, республика кимәлендә енеү яулаған рус теле һәм башҡорт теле уҡытыусылары тәбрикләнде. Шулай уҡ Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылының 1-се лицей коллективына юғары награда тапшырылды. Был коллектив "Рәсәй мәғарифының элитаһы" милли премияһының алын миҙалына лайыҡ булды.

✓Роспотребсоюздың Башҡортостан бүлексәһе хәбәр итеүенсә, иҫкәртеү прививкалары Милли календарына ярашлы, йоғошло грипп сиренә ҡаршы "Гриппол" вакциналары менән тәьмин итеү башланды. Республикала хәүеф төркөмөнә ҡараған 800 мең кешегә прививка яһау планлаштырыла. Улар иҫәбенә мәктәпкәсә йәштәге балалар, мәктәп уҡыусылары, студенттар, медицина, мәғариф учреждениеларында эшләүселәр, алтмыш йәшен уҙған өлкән кешеләр инә.

✓Өфө тимер юлының беренсе сираты йыл аҙағына тиклем файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Уны тамамлау өсөн 170 млн һум аҡса талап ителә. Әле республика бюджетынан 20 млн һум аҡса бүленгән.

✓Быйыл беренсе тапҡыр йәш эшҡыуарҙар араһында конкурс үткәрелгәйне. Конкурстың еңеүсеһе итеп Салауат ҡалаһынан Эдуард Мәүлиханов танылды. Уға 150 мең һум премия тапшырылды.

*✓ Маҡсатҡа өлгәшкәс, суверенитетҡа ҡаршыларҙың күбеһе власть башына менеп ултырҙы, ә уны яулаусыларға вазифа-фәлән тәтемәне. Халыҡ өсөн көрәшкән шәхестәрҙең бер ваҡытта ла рәсми титулы булмай шул...*



ӘЙТӘГҮР!

# "БИЛДӘҺЕҘ ДУҪҠА" ЯУАП,

## йәки суверенитеттың асылға ҡайтарыуы тураһында

**Телефон шылтыраны. Трубканы алыу менән берәү: "Һеҙ телевизорҙан суверенитет бөтә халыҡҡа асылына ҡайтырға мөмкинлек бирҙе, тип һөйләнегеҙ, ә бит совет заманында хәҙерге кеүек бандитлыҡ, талау, әшәкелек, наркоманлыҡ, фәхишәлек булмаған, был боҙоҡлоҡ һеҙ маҡтаған суверенитет, демократия менән килеп инде",- тип теҙҙе һәм минең яуап биргәнде лә көтмәй, трубканы һалды.**

Боҙоҡлоҡтоң, барса афәттең башын аңламағандар ҙа бар икән. Атеизм хөкөм һөргән, бәндәләрҙе Аллаһыны танымаҫҡа өндәгән, иманһыҙлыҡҡа этәргән 1917 йылғы ихтилалдан һуң диненән яҙҙырылған бөтә Рәсәй халҡы милли асылын бөтөнләй юғалта яҙҙы. Беҙ, аҙ һанлы милләт вәкилдәре, телебеҙҙән, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙән ситләтелеп, ата-бабаларыбыҙҙың изге хазиналарына хыянат итеп, уларҙы "иҫкелек ҡалдығы" итеп, яңы тормошҡа юл алдыҡ. Ни өсөн ололарға назан, "иҫкелек ҡалдығы" мөһөрө һуғылды һуң? Китапта яҙылған тарих ошо тере шаһиттарҙың фекеренә, һөйләүенә тап килмәгәнгә күрә шулай аталды улар. Йәштәрҙе дин ҡанундары менән йәшәгән олатай-өләсәйҙәренән айырырға, уйлап сығарылған тарих менән уларҙың күҙҙәрен буярға, шуға ышандырырға тырышҡан аҫтыртын сәйәсәттең сираттағы мут алымы ине ул. Бына шулай итеп атеизм менән ағыуланған, иманһыҙ заман бәндәләре тәрбиәләнде, хәҙер инде улар үҙҙәре олатай, өләсәй.

М. Булгаковтың "Эт йөрәге"ндәге Шариковҡа әйләнеү осоро башлана. 50-60 йыл дауамында рухи фажиғәгә дусар ителә халыҡ: тәүҙә Ленин идеяһына ныҡ ышаныу, һуңынан Сталиндың аяуһыҙ ҡамсыһынан дер ҡалтырау "әхлаҡи тәртә"лә тота. Аллаһтан, имандан башҡа бер нәмә лә мәңгелек түгеллеген, донъяны дер һелкеткән "даһи"ҙар ҙа, заман да ваҡытлыса икәнлеген халыҡ бик һуң аңланы. 1991 йылдың августында СССР емерелгәндән һуң "кып-ҡыҙыл" тәрбиә үҙ "емеш"ен бирҙе, һәр саҡ йомшаҡ ереңде күҙәткән дошман, беҙҙең рухи ҡалҡанһыҙ иманһыҙлыкты ҡорал итеп, бөтә Рәсәйҙе бер һелтәүҙә әйләндереп һалды. Америка сәйәсәте тормошҡа ашырыла башланы. Сиктәр асыҡ, тәрлө секта, порнография, ҡатын-ҡыҙҙың тәмәке тартыуы, фәхишәлек, наркоманлыҡ, бысаҡҡа -бысаҡ килгән һуғыш-үлтереш кинофильмдары яҙғы ташҡындай илде баҫып алды. Иманы зәғиф рәсәйлеләр шул мәғлүмәтте "донъя цивилизацияһы" итеп ҡабул итте - алдау-йолдау менән байырға тырышыу, отош уйындары, йәнен-тәнен һатыуҙар бихисап күләмдә башҡарылды. Тарихи эволюцияны туҡтатыр көс юҡ, был көн иртәме-һуңмы килер ине. М. Булгаковтың Шариковынан кире кешегә әүерелер өсөн күп көс түгелде. Суверенитет өсөн көрәшеүселәр рухи сәләмәтлектең, иман ҡеүәтенең мөһимлеген күпкә алдан аңлап, халыҡтың киләсәген күҙаллап, бөтә аң-фигелен, белемен туплап, һаулығын йәлләмәйенсә, үҙ теләге менән бушҡа эшләне. Маҡсатҡа өлгәшкәс, суверенитетҡа ҡаршыларҙың күбеһе власть башына менеп ултырҙы, ә уны яулаусыларға вазифа-фәлән тәтемәне. Халыҡ өсөн көрәшкән шәхестәрҙең бер ваҡытта ла рәсми титулы булмай шул... Вәлиди, Аҡмулла, Бабичтарға ундай титул кәрәкмәй...

**Әле 20-30 йыл элек кенә булған тарихтың тере шаһиттары менән совет осоро һәм хәҙерге тормош тураһында әңгәмә ҡорҙом.**

**75 йәшлек бабай:**

- Мин ғүмер буйы ауылда йәшәнем, тормошобоҙ насар булманы. Алдағы бәхетле ҡартлыҡ өсөн тырыштыҡ, тормош иптәшем менән эш-эш, тип, көнө-төнө саптыҡ, тик күңелдә мәңгелек хәүеф. Хаҡлы ялда булғас, хәҙер уйланырға ваҡыт етерлек. Мин шуны аңланым: беҙҙең өсөн уйлайҙар, беҙҙе ҡайғырталар, тип үҙ асылыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ икән. Айырыуса балалар кәсеп, һатыу итеү, йүнселлек кеүек нәмәне ишеткәне лә булманы, сират етһә, фатирын да, машинаһын да һәм башҡаларҙы алырбыҙ, тиген көтөү позицияһында йәшәп, ялҡаулыҡ, битарафлыҡ сиренә юлыҡҡаныбыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ, ә һаман айный алмайбыҙ. Уйлап ҡараһаң, оялып ҡуяһың, беҙҙәге кеүек хәлдәр башҡа илдә булдымы икән? Йорт тәҙөү түгел, мейес өсөн кирбес алып булманы. Ҡала Советына ғариза яҙып, сиратҡа тороп, бер нисә йыл үткәс кенә саҡ кирбес ала инек. Машина, мотоцикл, тәгәрмәстәр, келәм, балаҫ, мебель бүлеп ултырҙылар бит! Эшләп тапҡан аҡсаңа кемгәләр барып ялынып, кәмһенеп машина һорайһы юҡ хәҙер.

**76 йәшлек инәй:**

- Эй, балам, хәҙер аптырарлыҡ - совет заманында һәр колхоз, совхоз өйәр-өйәр һыйырҙар, мал көттө. Ул һөт, ит ҡайҙа булғандыр... Таңдан һөткә сират, байрамдарға май, колбасаны, хәйер һымаҡ, яртышар кило бирәләр ине. Элек ауылыбыҙҙа ике мәсет бар ине, шуларҙың манараһын ауҙарып, клуб яһанылар. Указлы мулла олатайымдың 7 һыйыры булды. Уға "халыҡ дошманы" мөһөрө тағып, Себергә ебәрҙеләр. Ана шул сығып китеүҙән һуң тыуған йортобоҙға ҡайта алманыҡ. Совет осоро күп михнәт алып килде. "Халыҡ дошманы" нәҫеле тип нарыҡланып, атайым да бер эштән икенсеһенә һәм ҡаланан-ҡалаға күсенеп йөрөнө. Атайым 98 йәшендә мәрхүм булды, 5 намаҙын ҡалдырманы, беҙҙе лә өйрәтте, диндән бөтөнләй айырылманыҡ. Хәтеремдә, бер ҡыҙым мәктәп ашханаһында ашағандан һуң "Аллаһу әкбәр" әйтеп, битен һыпырған өсөн мәктәпкә саҡыртып әрләнеләр, шунан уны тыйырға тура килде инде. Атайым иҫән булһа, хәҙер ҡыуаныр ине, динебеҙҙе йәшеренеп, еңәйәт ҡылған кеүек тотмайбыҙ, тип. Диннеҙ, иманһыҙ бәндәлә оят, намыҫ тигән нәмә юҡ. Биш бала үҫтерҙек, тырышып эшләнек. Ике улым икешәр тапҡыр "кодировать" ителгән, бер киленем эсә, ҡыҙы - ейәнсәрем урам аҡылы менән йәшәй. Һорау күп - ҡасан башланды был тәртипһеҙлек? Аллаһы юҡ, беҙ маймылдан барлыҡҡа килгәнбеҙ, тәбиғәттән барыһын да ал, тигәнгә ышанып ҡылана торғас, килеп еткәнбеҙ упҡынға. Тормошто кире бороп булһа, балаларыма тыуғандан алып дин тәғлимәтен өйрәтә башлар инем. Имандары ныҡ, рухы көслә, сәләмәт булһа, дөрөҫ йәшәрҙәр ине. Беҙ үҙебеҙ ҙә Аллаһыны онотоп бөткәйнек бит.

**65 йәшлек инәй:**

- Рухи көрсөктән сығыу өсөн иң беренсе ололар тәртипле булырға тейеш. Күршемдәге 17 йәшлек ир балаға, өлкәндәрҙе ихтирам итергә кәрәк, тигәс: "Было бы за что их уважать, сами хуже, чем молодежь, не просыхают", - тип ауыҙҙы япты. Ысынлап та, хөрмәт итерлек, өлгө булырлыҡ итеп үҙебеҙҙе тота белергә кәрәк бит. Рухи тарҡалыуҙың башы, тимәк, тәрәндә, ана шул иманһыҙ совет йылдарында. Эшкә ярамаҫлыҡ хәлгә еткән, боҙоҡ әхлаҡлы тәҙәтеү иман нигеҙендә ҡоролорға тейеш. Халыҡ фәһемле хәҙистәрҙән өйрәнһен ине.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА яҙып алды.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# НИНДӘЙ ГЕНӘ КИТАПТАР СЫҠМАЙ!

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республикабыҙҙа берҙән-бер милли нәшриәт һәм ул ысын мәғәнәһендә суверенитет емеше булды. Рәсәй Китап нәшерләүселәр ассоциацияһы үткәргән рейтингта ул иң алдынғы йөҙ нәшриәт араһында һәм милли нәшриәттәр буйынса тәүге урындарҙың береһен биләй. Нәшриәттә дәреслектәр, уҡыу әсбабы, нәфис һәм балалар әҙәбиәте, фәнни-популяр әҙәбиәт, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт, календарҙар баҫыла. Баҫмалар башҡорт, татар, рус һәм күп милләтле республикабыҙҙың башҡа халыҡтары телдәрендә донъя күрә.**

Башҡортостаныбыҙҙың визит карточкаһына әйләнгән, уның ҡабатланмаҫ йөҙөн билдәләгән, һоҡланғыс тәбиғәт матурлығы менән таныштырыусы фотоальбомдар һуңғы йылдарҙа күпләп донъя күрҙе.

Республиканың арҙаҡлы шәхестәре менән дә таныштырыуҙы дауам иттек.

"Китап" һәр ваҡыт илебеҙҙә барған ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар уртаһында ҡайнай. Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығы айҡанлы нәшриәттә илленән ашыу китап баҫылды. 2008 йылдан алып 2011 йылға тиклем Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына бағышланған 50-нән ашыу китап нәшер ителде. Был серияла иҫән ҡайтҡан фронтовик авторҙарҙың әҫәрҙәре донья күрҙе. Сығарылған китаптар менән нәшриәт коллективы Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына мәңгелек һәйкәл ҡуйҙы тиһәк тә һис арттырыу булмаҫ.

Китап - мәңгелек ҡиммәттәрҙең береһе. Шуға ла әҙәбиәт тарихының төрлө осорҙарына мөрәжәғәт итәбеҙ. "Башҡорт әҙәбиәте антологияһы"ның ике томы баҫылып сыҡты. Нәшриәттә шулай уҡ яңы сериялар барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, "Йәштәр тауышы", "Халыҡ китабы", "Салауат вариҫтары", "Аҡмулла эҙенән", "Кәрҙәшлек кәштәһе".

2009 йылда үҙенең 90 йыллыҡ юбилейын билдәләгән нәшриәтебеҙҙең Зәйнәб Биишева исемен йөрөтөүе лә суверенитеттың бер ҡаҙанышы ул. Был бөйөк яҙыусының исемен алыу нәшриәткә дан менән бергә ҙур яуаплылыҡ та йөкмәтә. Киләсәктә беҙ тағы ла байыраҡ йөкмәткеле, биҙәлеше заман талабына яуап биргән баҫмалар нәшер итергә бурыслыбыҙ. Һәм, әлбиттә, ҡаҙаныштарыбыҙҙы башҡаларҙың таныуына өлгәшеү ҙә бурыс. Бына әле 24-26 сентябрҙә Ашхабадта үткән "Китап - хеҙмәттәшлек һәм алға барыу юлы" Халыҡ-ара китап күргәҙмәһендә ҡатнашып, нәшриәтебеҙ оло баһаға лайыҡ булды.

**Зөлфиә ҠАРАБАЕВА, нәшриәттең баш мөхәррире.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Баш ауыртыуы



Ҡайһы саҡта бының сәбәбе булып ҡан тамырҙарының насарайыуы тора. Бер лимонды һәм бер баш һарымһаҡты таҙартып, ит үткәргестән үткәрергә һәм 100 грамм көнбағыш майы ҡушып болғатырға. Иҙмә бөткәнсе көнөнә бер тапҡыр бер балғалаҡ ашарға. Дауаны араларында 1-әр аҙна ял итеп, 4 тапҡыр ҡабатларға. Варикоз ваҡытында ла ярҙам итер. Иҙмәне мотлаҡ һыуытҡыста һаҡларға.

### Һалҡын тейгәндә

Һалҡын тейгәндә 1-әр ҡалаҡ алоэ һуты менән балды болғатып, көнөнә 3 тапҡыр 3-4 көн дауамында эсһән, файҙаһы ҙур. Был ҡатнашманы организмды таҙартыу өсөн ҡулланһаң да була.

### Эсәктәр эшмәкәрлеген көйләү

1-әр балғалаҡ шиңмәҫгөл (бессмертник) үләнен, энәлек (боярышник) емешен алып, ҡайнар һыу менән бешекләгәс, көнө буйы эсеп бөтөргә. Яҙлы-көҙлө аш эшкәртеү ағзалары эшмәкәрлеге насарайып китеүсән була. Шуға ла миҙгелдең был осоронда 1-әр ҡалаҡ шиңмәҫгөл менән бөтнөктө бер стакан ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, йылы көйө көнөнә ике тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Дауаны 10-14 көн дауамында эсергә кәрәк.

### Организмдан артыҡ тоҙҙо ҡыуыу

1 стакан самаһы көнбағыш тамырына 2 литр һыу ҡойоп, 5 минут талғын утта ҡайнатырға. Ул йылымыс хәлгә еткәс, һөҙөргә. Ошо төнәтмәне өлөштәргә бүлеп, 2 көндә эсеп бөтөргә. Дауаны 4 көн дауам иткәс, 3-4 көн ял итеп алырға кәрәк. Был ваҡыт эсендә йөҙөм, күрәгә, ҡара емеш, инжир, бал ашарға. Төнәтмә пиелонефрит булғанда ла файҙалы.

### Аш һеңдереү

Ашҡаҙанға ауыр булып торғанда 1 балғалаҡ туралған бәпембә тамырын 200 мл ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, йылы ғына итеп көнө буйы йотомлап эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

БЕҘ - БАШҠОРТТАР!

# ТӨРЛӨ ДИАЛЕКТТА ҺӨЙЛӘШӘБЕҘ, әммә беҙ бер ҡанданбыҙ

**Бөгөнгө көндә башҡорт телселәре хәҙерге башҡорт дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телмәрен өс диалектҡа бүлә: көнсығыш диалект, көньяҡ диалект һәм төньяҡ-көнбайыш диалект. Диалекттар үҙҙәре вағыраҡ берәмектәргә - һөйләштәргә, ә ҡайһы бер һөйләштәр һөйләшсәләргә бүленә.**

## Көнсығыш диалект

Көнсығыш диалектҡа Әбйәлил, Учалы, Мәсетле, Балаҡатай, Дыуан, Ҡыйғы, Салауат райондарындағы, Баймаҡ һәм Бөрйән райондарының төньяҡ өлөшөндә, шулай уҡ Силәбе, Ҡурған һәм Свердловск өлкәләрендә йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү телмәре ҡарай. Көнсығыш диалектында һөйләшкән башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә элек түбәндәге ырыу-ҡәбиләләр йәшәгән: ҡатай, табын, әйле, көҙәй, ҡыуаҡан, күбәләк, тиләү, тамъян, ҡарағай ҡыпсаҡ, салйоғот, һеңрән, һыҙғы, бәләкәтин, һ.б.

Көнсығыш диалекттың төп айырма билдәһе булып күплек ялғауының һүҙ нигеҙе һиндәй өнгә бөтөүенә ҡарап дүрт төрлө килеүе һанала: 1) әгәр һүҙ нигеҙе һуҙынҡы өнгә бөтһә, уға *-лар/-ләр* ялғауы ҡушыла *(ҡалалар, ололар, көҙәләр, тәңкәләр)*; 2) әгәр һүҙҙең нигеҙе һаңғырау тартынҡыларға *(п, т, с, ҫ, ш, ф, к, ҡ, х)* бөтһә, уға *-тар/-тәр* ялғауы ҡушыла *(ҡоштар, аттар, китаптар, һарыҡтар, әтәстәр, төрөктәр)*; 3) әгәр һүҙҙең нигеҙе *л, м, н, ң, з, ж* тартынҡыларына бөтһә, уға *-дар/-дәр* ялғауы ҡушыла *(телдәр, үләндәр, кейемдәр, моңдар)*; 4) әгәр һүҙҙең нигеҙе *р, й, ҙ, у (уау)* тартынҡыларына бөтһә, уға *-ҙар/-ҙәр* ялғауы ҡушыла *(тамырҙар, өйҙәр, ҡыҙҙар, тауҙар, кейәүҙәр)*. Был күренеш, йәғни ялғауҙарҙың дүрт төрлө килеүе, башҡа күп кенә ялғауҙарҙа ла сағыла *(таштыҡ, утынлыҡ, яуҙыҡ, балалыҡ; таштаны, тәмдәне, һөйҙәне, үпкәләне; ун биштәп, ундап, йөҙҙәп, иллеләп; башты (кеше), ҡыйҙы (иген), ҡомдо (урын), һалмалы (аш)* һ.б. Быңдай ялғауҙар бороңғо осорҙа яһалған һүҙҙәрҙә лә сағыла: *аҡсарҙаҡ, төйҙөгән, маңдай, өрҙөк (өрләк), һендем (һеңлем), селдә (селлә), саҡтым (саҡлым)* һ.б.

Көнсығыш диалект дүрт өлөшкә бүленә: Арғаяш һөйләше, Салйоғот һөйләше, Әй-Мейәс һөйләше һәм Ҡыҙыл һөйләше. Был һөйләштәр бер-береһенән бигерәк тә өндәр үҙгәреше менән айырыла.

## Көньяҡ диалект

Көньяҡ диалектты көнсығыш диалекттан айырған төп билдә булып күплек ялғауының һәм һүҙ яһаусы ялғауҙарҙың ике төрлө килеүе һанала: *м, н, ң* өндәренән һәм улар *н* тартынҡыһынан башлана *(дошманнар, көннәр, утынныҡ, ҡомноҡ, тиннек, тыңна, тәмнә, ҡомно, тәмне һ.б.)*; ҡалған башҡа тартынҡыларҙан һәм һуҙынҡыларҙан һуң был ялғауҙар *л* тартынҡыһынан башлана *(атлар, һыйырлар, таулар, арбалар, ташлыҡ, ағаслыҡ, балалыҡ, йылы, һөйлә, ташла, ағаслы, түмәрле, алмалы)*. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә *р, с, ш, т* тартынҡыларынан һуң да *н* тартынҡыһына башланған ялғауҙар ҡушылырға мөмкин *(сатна, ситнәт, ҡатнаш, йәшнә)*.

Төп башҡорт *һ, ҫ, ҙ* өндәренең ҡулланылышы буйынса көньяҡ диалект көнсығыш диалекттан нык айырыла: әгәр көнсығыш диалектта *һ, ҫ* өндәренең килеп сығышы дөйөм төрки *с, з, д* өндәре менән бәйле булһа, көньяҡ диалектта улар тик дөйөм төрки *с* өнө менән бәйле (көнсығыш диалектта: *ҡаз* < *ҡаҙ, ҡаҫ, ҡаһ; ҡысҡа* < *ҡыҫҡа, ҡыһҡа; көньяҡ диалектта: сискән* < *ҫиҫкән, һиҫкән, һикһән*).

Көньяҡ диалект үҙенең үҙенсәлекле һүҙҙәре менән дә ҡалған ике диалекттан айырыла.

Көньяҡ диалект өс һөйләшкә бүленә: Эйек-Һаҡмар һөйләше, Урта һөйләш, Дим һөйләше.

(Дауамы 7-се биттә).

ИҪӘБЕБЕҘ МӨҺИМ

# БАШҠОРТОСТАН, ЭЙЕ, КҮП МИЛЛӘТЛЕ,

## әммә унда башҡорт - аҫаба!




**2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Башҡортостанда 4 млн 102 мең 900 кеше, йәғни Рәсәй Федерацияһы халҡының 2,7 проценты, йәшәй. Халыҡ һаны буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләһә, Волга-Урал төбәгендә - икенсе (Свердловск өлкәһенән һуң), Рәсәй Федерацияһында етенсе урында тора.**

**Башҡортостан халҡы күп милләтле. Этник күп төрлөлөгө буйынса ул "тауҙар һәм халыҡтар иле" Дағстандан ҡала Рәсәйҙә икенсе урында. Башҡортостанда төрки телле башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, ҡаҙаҡтар, үзбәктәр, әзербайжандар; көнсығыш славяндары - рустар, украиндар, белорустар; фин-уғырҙар - мариҙар, мордвалар, удмурттар йәшәй. Башҡорт крайы - айырым Кавказ (әрмәндәр, грузиндар), Балтика буйы (латыштар, литвалар, эстондар) һәм Урта Азия (тажиктар, төркмәндәр) халыҡтары вәкилдәре өсөн икенсе тыуған ил.**

### Бында башҡорт еҫе...

Крайҙың хәҙерге халҡы быуаттар һуҙымында барлыҡҡа килә. XVII йөҙ йыллыҡҡа тиклем төньяҡтан Тулва һәм Сылва йылғаларынан алып көньяҡта Илек һәм Яйыҡ йылғаларына, көнбайыштан Урта Волга буйынан көнсығышта Себерҙең Тубыл йылғаһына тиклем һуҙылған Тарихи Башҡортостандың халҡын тик башҡорттар ғына тәшкил итә. Беренсе тапҡыр башҡорттар тураһында бороңғо грек тарихсыһы, "тарих атаһы" Геродоттың (беҙҙең эраға тиклем V быуат), Көнбайыш Европа һәм Көнсығыш сәйәхәтселәренең яҙмаларында иҫкә алына. XVI быуатта Осман (Оттоман) империяһы солтанының үҙе менән "тәкәббер һөйләшеү" алып барған ҡеүәтле дәүләт батшаһы менән килешеү нигеҙендә башҡорттар Рәсәй подданствоһы ала. Башҡорттарҙың еренә күскенселәр: көсләп христианлаштырыуҙан ҡурҡҡан мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, мордвалар, шулай уҡ феодаль-крепостной баҫымдан ҡасыусы рустар ағыла башлай. Күскенселәр аҫаба башҡорт ерҙәрендә припущенниктар сифатында йәшәй. Тәүҙә башҡорттар улар яғынан үҙҙәренең Алтын Урҙа (XIII быуат) хандары һәм Иоанн Грозный (XVI быуат) биргән жалованный грамоталар менән раҫланған аҫабалығына хәүеф күрмәй.

Артабанғы быуаттарҙа күскенселәр ағымы арта. XVII быуатта уҡ Башҡорт Уралы арьяғында хеҙмәтсе (служилый) мишәрҙәрҙең беренсе ауылдары барлыҡҡа килә. Мишәрҙәрҙең күпселеге башҡорт ерҙәренә XVIII быуатта күсенеп килә. Шунда уҡ Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш, көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығышында Ҡаҙан, Ҡасим һәм Темников (тумен) татарҙары төпләнә (ҡуртым шарты менән).

Ағиҙелдең түбәнге ағышында, Ҡариҙел йылғаһының төньяҡ бөгөлөндә мари халҡының ҙур ғаиләһе барлыҡҡа килә. Барҙа, Тулва (Тол), Етеҙ Танып һәм Ыҡ йылғалары буйында йәшәгән башҡорттар араһына удмурттар килеп ултыра. Ағиҙел-Ыҡ йылғалары араһында сыуаш ауылдары барлыҡҡа килә. Һамар-Сызрандағы Волга буйынан мордвалар күсенә.

XVI быуаттың икенсе яртыһында Башҡорт крайында беренсе рус күскенселәре (стрелецтар, казактар, дворяндар) күренә башлай һәм тәүҙә улар көнбайыш ерҙәрҙә, XVII быуаттың уртаһынан Урал арьяғында урынлаша. Артабанғы йөҙ йыллыҡтарҙа рустарҙың күсенеүе шул тиклем көслө дауам итә, хатта уҙған быуаттың башында Көньяҡ Урал алды территорияһында күпселекте рустар тәшкил итә.

Көньяҡ Уралдың төп халҡы булған башҡорттарҙың һаны төрлө тарихи ваҡиғалар йоғонтоһонда төрлөсә тирбәлеп тора. Башҡорт ихтилалдары менән билдәләнгән XVII - XVIII быуаттар, әлбиттә, халыҡ һанын арттырмай, киреһенсә, ул кәмей. Ҡаҙан губернаторы П. М. Параскин белдереүенсә, 1709 йылдың февраленә тиклем "Ҡаҙан һәм Өфө өйәҙҙәрендә 303 ауыл (башҡорт) яндырыла һәм талана, 12705 кеше үлтерелә һәм пленға алына". 1735-1741 йылдарҙағы бер башҡорт ихтилалын баҫтырғанда ғына П. Рычковтың иҫәпләүҙәре буйынса 28,5 мең башҡорт ире үлтерелә һәм һөргөнгә оҙатыла. 1719 -1762 йылдарҙа ғына Көньяҡ Урал башҡорттарының һаны 65 мең кешегә кәмей, ә татар һәм рустарҙың, киреһенсә, 33,7 һәм 118 мең кешегә арта. Икенсе ревизия мәғлүмәттәре буйынса (1743 йыл) башҡорттар халҡының яртыһын тәшкил иткән Өфө провинцияһында ла башҡорттар һаны кәмей. Беренсе ревизия буйынса татарҙар бөтөнләй булмай, әммә икенсе ревизия мәғлүмәттәре буйынса улар 3,1 процент тәшкил итә, ә Исет провинцияһында - 2,4 процент.

Көньяҡ Уралда рустар халыҡтың 1/3 өлөшөн тәшкил итһә лә, Өфө провинцияһында улар ҙа күп булмай (беренсе ревизия буйынса - 8,5, икенсеһендә - 9,4 процент).

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ФИЛАРМОНИЯЛАР... халыҡ сәнғәтен күтәрә

Республикала үткән быуаттың 90-сы йылдарына тиклем Башҡорт дәүләт филармонияһы ғына эшләп килһә, Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекама дәүләт филармониялары, Учалы муниципаль филармонияһы һуңғы егерме йыл эсендә барлыҡҡа килде. Баш ҡалалағы филармония бик күп сәнғәт төрҙәрен, төрлө йүнәлештәге һәм жанрҙағы концерттарҙы берләштереүсе учреждение, ә был концерт ойошмаларының урындағы халыҡты профессиональ сәнғәткә йәлеп итеү йәһәтенән әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Учалы, Сибай, Стәрлетамаҡ, Нефтекама филармонияларының тағы бер үҙенсәлеге бар: улар төрлө милләт халыҡтарының мәнфәғәтен иғтибар үҙәгенә ҡуйып эшләй итә. Мәҫәлән, Сибайҙа бик матур башҡорт төркөмдәре, "Сибай" бейеү ансамбле, Стәрлетамаҡта сыуаш коллективы, Нефтекамала татар, мари төркөмдәре уңышлы эшләй. Йәғни, республиканың был төбәктәрендә филармониялар аҫыу башҡорт сәнғәте өсөн генә түгел, ә башҡа милләт халыҡтары өсөн дә шатлыҡлы ваҡиға булды. 2004 йылда беренсе тапҡыр филармониялар фестивале үткәрҙек. Был сара ла республика сәнғәтен тағы ла байытып, баҙыҡландырып ҡына ебәрә, зауыҡлы, бай эстәлекле тамашалар Өфө тамашасыһының күңеленә лә хуш килә.

Суверенитет яулағандан һуңғы йылдарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһында ике оркестр - эстрада-джаз һәм БР-ҙың халыҡ ҡоралдары милли оркестрҙары төҙөлдө. Филармония бинаһы төҙөкләндерелде, яҡты, матур залдарлыҡҡа донъя кимәлендәге билдәле музыканттар, артистар сығыш яһай. Хөкүмәт тарафынан артистарыбыҙға ла иғтибар ҙур: төрлө маҡтаулы исемдәр ҙә бирелде, уларҙың йәшәү шарттарын яҡшыртыу йәһәтенән дә үҙгәрештәр байтаҡ. Ижад итеү өсөн бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған хәҙер - былтырҙы барлыһын да суверенитет емеше тип атарға тулы хаҡыбыҙ бар.

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН,**
Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры.

## Даль ҡалдырған мираҫ

XVIII быуат аҙағында халыҡ иҫәбе ҡабаттан алына. Сираттағы ревизия крайҙа башҡорттар күпселекте тәшкил итеүен раҫлай. Мәҫәлән, Бөрө өйәҙендә (хәҙерге административ-территориаль ҡоролош буйынса Кушнаренко, Дүртөйлө, Борай, Балтас, Илеш, Тәтешле, Яңауыл, Асҡын, Ҡариҙел, Мишкә, Ҡалтасы райондары) башҡорттар - 87, типтәрҙәр - 8,8, татарҙар 4 проценттан саҡ ҡына күберәк була. Татарҙар менән типтәрҙәр икеһе бергә Бәләбәй өйәҙендә (хәҙерге Йәрмәкәй, Бүздәк, Туймазы, Саҡмағош, Шаран, Баҡалы, өлөшләтә Илеш районы) төп халыҡтан ике тапҡырға аҙ була. Әйткәндәй, был өйәҙ тураһында вариҫтарға "Толковый словарь живого великорусского языка" китабын төҙөүсе, Рәсәй географтары йәмғиәтен ойоштороусы, табип, инженер, яҙыусы Владимир Иванович Даль ҡиммәтле мәғлүмәт ҡалдыра. **"В 12-м башкирском кантоне, - тип яҙа ул, - есть место в 1800 квадратный верст, где нет ни одного русского, ни татарина, ни мещеряка, ни чувашина, ни мордвина, ни вотяка, ни тептяря, ни черемисина, нет вовсе этих, так называемых, припущенников и переселенцев, которые обще с нашими заводчиками, переполосовали и испятнали уже почти всю Башкирь, тягаются лет по тридцати и более с родовыми жителями, владеющими землями на вотчинном праве, и частью уже оттягали сотни тысяч десятин богатейших в мире земель, расквитавшись с вотчинниками-башкирами или десятилетнею давностью владения, или полюбовною сделкою, тремя головами сахару, фунтом чая и словесными обещаниями не припускать никого более на их земли; земля эта, о которой я говорю, лежит на Белебеевском уезде и принадлежит четырем родам или волостям, известным под общим названием демских башкир..."** (Быға шуны өҫтәргә була: 12-се башҡорт кантонының кантон штабы Бүздәк районының Шланлыкүл ауылында була).

XVIII быуат һуңында Минзәлә өйәҙендә лә башҡорттар күпселекте - 72 процент тәшкил итә. Типтәрҙәр һәм татарҙар - 28 процент.

Крайҙың аҫаба халҡының һиҙелерлек үҫеше XIX быуатта күҙәтелә. IX ревизия мәғлүмәттәре буйынса (1850 йыл), башҡорттар 508 мең кеше, тип иҫәпләнә, X ревизияға (1858 йыл) улар 545 мең кеше була. Өфө губернаһында ғына 1858 йылда 330,9 мең башҡорт була (сағыштырыу өсөн: рустар - 265,5 мең, типтәрҙәр - 221,8 мең, мишәрҙәр - 105,9 мең, татарҙар - 86,5 мең).

Рәсәй империяһының бөтөн тарихында бары тик бер генә дөйөм халыҡ иҫәбен алыу уҙғарыла - 1897 йылда. Айырым етешһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, 1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдары XIX быуат һуңында Рәсәй империяһы халҡының иҫәбе, составы һәм урынлашыуы тураһында тулы мәғлүмәт сығанағы булып тора.

Беренсе дөйөм халыҡ иҫәбен алыу (1897 йыл) мәғлүмәттәре буйынса Урал-Волга буйы губерналарында 1 млн 311 мең башҡорт иҫәпләнә. Рәсәй империяһында уларҙың күберәк булыуы ла ихтимал. Өфө губернаһында, перепись буйынса, 899,9 мең башҡорт йәшәй, шуларҙан 261,9 меңе -Бөрө өйәҙендә, 232,7 меңе - Бәләбәй өйәҙендә, 122,7 мең меңе - Минзәлә өйәҙендә, 114, 5 меңе - Стәрлетамаҡ өйәҙендә, 111,3 меңе - Өфө өйәҙендә, 51,2 меңе Златоуст өйәҙендә йәшәй. Бөрө һәм Бәләбәй өйәҙҙәре халҡының яртыһы башҡорт була. Минзәлә, Стәрлетамаҡ, Өфө һәм Златоуст өйәҙҙәре халҡының өс өлөшө башҡорт була. Сағыштырыу өсөн: ул ваҡытта Өфө губернаһында татарҙар (керәшен татарҙарын да индереп) 184,8 мең кеше тип иҫәпләнә, йәғни башҡорттарға ҡарағанда биш тапҡыр аҙыраҡ. Бөрө өйәҙендә 2,3 мең татар була (башҡорттарға ҡарағанда 115 тапҡырға аҙ), Бәләбәй өйәҙендә - 48,8 мең (5 тапҡырға аҙ), Стәрлетамаҡ өйәҙендә - 20,2 мең (6 тапҡырға аҙ), Златоуст өйәҙендә - 1,5 мең (27 тапҡырға аҙ), Минзәлә өйәҙендә - 107,1 мең (башҡорттарға ҡарағанда 15,6 мең кешегә әҙ).

1897 йылғы халыҡ иҫәбен алғанда мишәрҙәр айырым иҫәпләнә. Өфө губернаһында улар ул ваҡытта 20,9 мең кеше була, шуларҙың 59 проценты Стәрлетамаҡ өйәҙендә йәшәй.

Ырымбур губернаһында 254,6 мең башҡорт иҫәпкә алына, был халыҡтың 16 процентын тәшкил итә. Аҫаба халыҡтың һаны буйынса крайҙа Верхнеуральск (43,8 мең), Силәбе (50,5 мең), Ырымбур (54,9 мең), Орск (87,8 мең) өйәҙҙәре иң ҙурҙарҙан була. Губернаның территория буйынса иң бәләкәй Троицк өйәҙендә 14,2 мең генә башҡорт була. Ырымбур татарҙары һәм мишәрҙәре өлөшөнә ул ваҡытта 5,98 процент ҡына тура килә һәм улар губерна халҡының 1 процентын алып тора. Губернала рустар өҫтөнлөк итә (70 проценттан ашыу).

Ырымбур губернаһы элекке административ-территориаль бүленешендә (Ырымбур, Орск, Верхнеуральск, Троицк, Силәбе өйәҙҙәре һәм Ырымбур казак ғәскәре) 1919 йылға, Башҡортостан Республикаһы (Кесе Башҡортостан) ойошторолғанға тиклем йәшәй. Кесе Башҡортостанға Ырымбур, Орск, Верхнеуральск, Троицк һәм Силәбе өйәҙҙәренең башҡорттар йәшәгән олоҫтары бирелә.

Башҡортостан Республикаһы автономияһы иғлан ителгәндән һуң Өфө губернаһының административ-территориаль бүленешендә үҙгәрештәр була. 1920 йылда 156,8 мең башҡорт иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙе Татарстан АССР-ына бирелә. 1922 йылда Өфө, Златоуст, Троицк өйәҙҙәренең һәм 20,7 мең башҡорт халҡы булған Ялан кантоны (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондары, 1919 йылға тиклем - Һарт-Ҡалмаҡ һәм Ҡатай олоҫтары) Силәбе губернаһына ҡушыла. Административ-территориаль сиктәрҙе үҙгәртеү Өфө губернаһына ғына ҡағылмай, 1924 йылда Туҡсоран һәм Иманғол олоҫтары 15 меңлек башҡорт халҡы менән Ҡырғыҙ АССР-ына (Ҡаҙағстанға) ҡушыла. Вятка губернаһының башҡорттары (13,9 мең кеше) автономиялы республика сиктәренән ситтә тороп ҡала.

### Тәүге совет переписе

Октябрь революцияһынан һуң халыҡ иҫәбен алыу 1920 йылда уҙғарыла. Әммә оҙайлы хәрби хәрәкәттәр арҡаһында илдең бер нисә төбәге, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһының Бөрйән-Түңгәүер, Тамьян-Ҡатай һәм өлөшләтә Үҫәргән кантондары иҫәпкә алынмаған. Иҫәп алыу һөҙөмтәләре буйынса, Өфө губернаһында 631, 9 мең башҡорт, 219, 7 мең татар, 142, 1 мең типтәр, 141, 4 мең мишәр йәшәгән. Аҫаба халыҡ һаны буйынса губернала Бәләбәй (234, 1 мең), Бөрө (229, 1 мең), Стәрлетамаҡ (88,2 мең), Өфө (71,1 мең) өйәҙҙәре айырылып торған.

Губерна татарҙарының яртыһы самаһы бары тик Стәрлетамаҡ өйәҙендә генә (101,1 мең) йәшәгән. Компактлы төркөмдәр булып улар шулай уҡ Бәләбәй (68,2 мең), Өфө (33,8 мең) өйәҙҙәрендә урынлаша.

80 проценттан ашыу мишәр Өфө (56,0 процент), Бөрө (58,1 проценты) өйәҙҙәрендә була. Стәрлетамаҡ өйәҙендә улар бик аҙ иҫәпләнә (2,3 процент).

142,1 мең типтәрҙең 117, 4 меңе (83 процент) ике: Бөрө (50,8 мең) һәм Бәләбәй (66,6 процент) өйәҙҙәрендә йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө губернаһында уҙған быуаттың 20-се йылдары башында һәр өсөнсө кеше башҡорт була, крайҙа башҡа төрки телле халыҡтар (татарҙар, типтәрҙәр, мишәрҙәр барыһы бергә) бер ярым тапҡырға аҙ була.**

**Мөхәмәт МЫРҘАБУЛАТОВ,**
**тарих фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

## ТЫРЫШЛЫҒЫБЫҘ ҺӨҘӨМТӘҺЕ -
## аҡыллы һәм иманлы балалар

Бала үҙенең тамырҙарын юғалтмаһын, асылынан ситләшмәһен, телен, тарихын, мәҙәниәтен белеп үҫһен өсөн ғаилә тәрбиәһе генә етмәй. Бының өсөн башҡорт мәктәбендә уҡырға, туған телендә белем алырға, үҙ тиҫтерҙәре менән ошо телдә аралашырға һәм, әлбиттә, артабан да улар менән бәйләнеш тотоп йәшәргә тейеш. Был бигерәк ҡала башҡорттарының балалары өсөн үтә мөһим мәсьәлә. Ошоно иҫтә тотоп, ата-әсәләрҙең һорауы, район ҡоролтайҙарының әүҙем эшләүе һөҙөмтәһендә суверенитет яуланған йылдарҙа республикала, шул иҫәптән Өфөлә лә, милли гимназиялар асыуға өлгәшеү мөмкин булды.

Инорс биҫтәһендә 140-сы башҡорт гимназияһын ойоштороп йөрөүселәрҙең береһе, аҙаҡтан был белем усағының етәксеһе булараҡ, ул көндәр күңелемдә тик яҡшы хәтирәләр ҡалдырған. Төрлө ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар булмай ҡалмағандыр, әммә бөгөнгө көн бейеклегенән улар бөтөнләй юғалып, бәҫһеҙләнеп ҡала. Ул саҡта уҡыусыларыбыҙҙың ата-әсәләре шул тиклем ҙур рухи ярҙам күрһәтте, бергәләшеп эшләнгән эштең ауырлығы, бәлки, шуның өсөн дә һиҙелмәгәндер. Башҡорт мәктәптәре бөгөн бик уңышлы эшләй, ҡала башҡорттары, юл мәшәҡәттәренә ҡарамай, балаларын тик милли мәктәптәрҙә уҡытырға тырыша. "Шаяниум", "Урал батыр вариҫтары" кеүек конкурстарҙа, былтырғы уҡыу йылында беренсе тапҡыр уҙғарылған балалар ҡоролтайында, олимпиадаларҙа ҡатнашыусы, еңеүсе урындар яулаусы балаларыбыҙға ҡарап, аҡыллы, иманлы яңы быуын үҫеп килеүен күрәм һәм ул саҡтағы тырышлығыбыҙҙың юҡҡа булмауына инанам.

**Альбина БАЯЗИТОВА,**
**Өфө ҡала округы Киров районы хакимиәте башлығы урынбаҫары.**

*БЕҘ - БАШҠОРТТАР!*

## ТӨРЛӨ ДИАЛЕКТТА ҺӨЙЛӘШӘБЕҘ,
## әммә беҙ бер ҡанданбыҙ

### Төньяҡ-көнбайыш диалект

Төньяҡ-көнбайыш диалектта Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында, Татарстандың Минзәлә һәм Аҡтаныш райондарында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү телмәре ҡарай. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты һәм уның һөйләштәре боронғо осорҙағы балыҡсы, унлар, танып, ирәкте, гәрәй, йылан, таҙлар, елдәт, уран, ҡырғыҙ, йәнәй, ҡаңлы, бүләр, биләр һәм башҡа башҡорт ырыуҙарының тел үҙенсәлектәренә нигеҙләнгән.

Төньяҡ-көнбайыш диалектын Ҡариҙел, Танып, Түбәнге, Иҙел, Ыҡ һәм гәйнә һөйләштәренә бүлеп ҡарайҙар. Был диалектта күплек ялғауҙары көньяҡ диалекттағы кеүек.

Төньяҡ-көнбайыш диалекттың төп үҙенсәлектәре түбәндәгеләр: 1) һүҙ башында дөйөм төрки *с* өнө үҙгәрешкә бирелмәгән: *син (һин), сеҙ (һеҙ), сырға (һырға), сыйлау (һыйлау), саҡалдырыҡ (һағалдырыҡ), суйыу (һуйыу)*. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә һүҙ башындағы *һ* өнө әйтелмәй: *ауа (һауа), өнәр (һөнәр), әйбәт (һәйбәт), ич/ис (һис) һ.б.*; 2) бөтә һөйләштәрендә лә *ҙ* өнө ҡулланыла: *барҙым, күрҙем, үрҙәк*. Ғәҙәттә *ҙ* өнө хәҙерге татар әҙәби телендәге *д* өнө урынына ҡулланыла, ә Ҡариҙел һәм түбәндәге Иҙел һөйләштәрендә *ҙ* өнө дөйөм төрки *з* өнө урынына ла ҡулланыла: *беҙ, сеҙ, ҡыҙыл, быҙау һ.б.*; 3) Ҡариҙел, Танып, түбәнге Иҙел һөйләштәрендә дөйөм төрки *ч* өнө, башҡорт әҙәби телендәге һымаҡ, *с* өнөнә күскән: *сыҙыу, сүмес, саҡырыу, соҡор, үсегеү, күсеү, өсөн һ.б.*; 4) өй өндәр ҡушылмаһы *ү* өнөнә күсә: *үрҙәк (өйрәк), үрә (өйрә), сүлә (һөйлә), үрәнеү (өйрәнеү), сүрәү (һөйрәү) һ.б.*; 5) татар теленән айырмалы рәүештә, беренсе ижектә *ә* өнө киңерәк ҡулланыла: *кәрәк, тәрән, кәбән, кәртә, кәмтә һ.б.*; 6) II зат бойороҡ һөйкәлешендә төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрҙәге һымаҡ *-ың/ -ең* ялғауы ҡулланыла: *килең (килегеҙ), ятың (ятығыҙ) һ.б.*; 7) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы *з* урынына *ҙ* өнө әйтелә: *ҙаман, ҙиһен, Ҙакир, ҙакун, ҙавут һ.б.*

Төньяҡ-көнбайыш диалектының Ҡариҙел һөйләше башҡа һөйләштәрҙән күп кенә үҙенсәлектәре менән айырыла. Уның төп үҙенсәлеге булып *м, н, ң, л, р* өндәре эргәһендә һаңғырау *ҡ, к, т* тартынҡыларҙың ҡулланылыуы тора: *синтә (һиндә), уңҡа (уңға), ҡалты (ҡалды), кемкә (кемгә). Син тә, мин тә (һин дә, мин дә), барты (барҙы), күртем (күрҙем) һ.б.* Был яҡтан ул көньяҡ диалекттың урта һөйләшенә яҡын, *р* өнөнән һуң *т* тартынҡыһы ҡулланыу Ҡариҙел һөйләшендә генә сағылыш ала. Ҡариҙел һөйләшендә һүҙ башында *д* урынына *ҙ* ҡулланыла: *ҙарыу (дарыу), ҙегет (дегет), ҙин (дин), ҙонйа (донъя).*

Төньяҡ-көнбайыш диалекты үҙенсәлекле лексикаһы менән билдәләнә: *орлоҡ (киндер), мәнсез (мәнсеҙ) (тәртипһеҙ), үләксә (мәйет), тәтәбәй (тел биҫтәһе), туҡранбаш (клевер), төрмә (бәлеш), төпчек/төпсөк (кинйә), ҙуринәй/зурнәй/зурәңкәй (өләсәй), ҙурәтәй (олатай), кисәк (ҡапыл), мортаҡ (тупаҫ), өҙөк (арыҡ), ондор (ырҙын), саҙаған (оло йәштәге), уш (хәтер), титаҡ (аҙһаҡ), саулыҡ (орғасы), сарымсаҡ (һарымһаҡ), ҡодоҡ/ҡоҙоҡ (мәке), ҡойо (ҡоҙоҡ), ҡарый (ҡарт), тиләскәү (еңел аҡыллы), тустаған (ағас туҫтаҡ), тутырма (ҡаҙы), күәс (икмәк күнәге), мүкләк /мәкләк (туҡал), межек (ығыш), янаға/ирбалдыҙ (ҡәйнеш), улан (йәш бала), түш/туш (шәре), тоҡмаҡбаш (сүмесбаш), баҡаяфраҡ/баҡа үләне (юл япрағы), белекей/бестек (бәләкәй), аяҡ сауыты (аяҡ кейеме), алма/жир алмасы (картуф), аса (бәҫ), божор (төпөш), баҡый (мәңге), айыу ҡамыры (энәлек), жуалғы (торомбаш), жалпы (уйһыулыҡ), суҡыр серки (ләпәк), сарфатсыз (әҙәпһеҙ), сайғаҡ (иҙән өрләгө), сәрәтә (зәржә), сөңгө (ҡаяу) һ.б.*

**✓ *1964 йылда Блумингтон ҡалаһында инглиз телендә "Башҡорт грамматикаһы" тигән китап нәшер итә, унда башҡорт теленең өсөнсө диалекты итеп төньяҡ-көнбайыш диалектын айырып күрһәтә.***

# ДИАЛЕКТЫ...

## айырылғыһыҙ бер өлөшө

нона әйләнде, бары тик күп йылдар үткәс кенә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын таный башланылар. Шул уҡ ваҡытта Н. Н. Поппе, Ә. Ә. Юлдашев, Т. М. Ғарипов кеүек ҙур ғалимдарға ошо диалектҡа иғтибар бүлгәне өсөн беҙ рәхмәтлебеҙ. Вашингтон университеты профессоры Н. Н. Поппе, СССР Фәндәр академияһының элекке мөхбир ағзаһы, эмиграцияла булғанда, 1964 йылда Блумингтон ҡалаһында инглиз телендә "Башҡорт грамматикаһы" ("Bashkir manual") тигән китап нәшер итә, унда башҡорт теленең өсөнсө диалекты итеп төньяҡ-көнбайыш диалектын айырып күрһәтә. Был темаға Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтының төрки телдәре секторында эшләүсе Ә. Ә. Юлдашев, Н. Н. Поппе кеүек үк, үҙ аллы позицияла тора алған. Унын эштәренең береһе, мәҫәлән, туранан-тура төньяҡ-көнбайыш диалектты өйрәнеү проблемаһы менән бәйле. "Был мәсьәлә, - тип бер тапҡыр ғына һыҙыҡ өҫтөнә алмай күренекле ғалимә С. Ф. Миржанова, - үҙенә телселәрҙең генә түгел, йәмәғәтселектең дә, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыштан сыҡҡан, үҙ телдәрен башҡорт теленең диалекты тип һанаған башҡорттарҙың иғтибарын йәлеп итә".

### Тамырҙарҙы барлау

XX быуаттың 70-80-се йылдарында башҡорттар йәшәгән барлыҡ территорияларҙа ла диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе артабан тәрәнерәк өйрәнеү буйынса интенсив эш башлана. Тәбиғи, башҡорт диалектологтары төньяҡ-көнбайыш башҡорттары алдында ла үҙҙәренең рухи бурысын үтәргә тейеш булған. Ниһайәт, тейешле тема Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми-тикшеренеү эштәре планына индерелә. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү телен комплекслы монографик өйрәнеү бурысын филология фәндәре докторы, ул ваҡытта уҡ билдәле диалектолог С. Ф. Миржанова үҙ иңенә алды. Ғалимәнең күп йыллыҡ фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә башҡорт фәне башҡорт теле диалекттарының береһен системалы өйрәнеүгә бағышланған ысын мәғәнәһендә яңы, иҫәп буйынса өсөнсө монография менән байыны. Элек уҙғарылған тарихи-этнографик һәм диалектологик тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп һәм экспедиция сәфәрҙәре барышында йыйылған материалдарҙы ҡулланып, С. Ф. Миржанова төньяҡ-көнбайыш диалекты һөйләштәренең фонетик, грамматик, лексик үҙенсәлектәрен ғәйәт тулы анализлай һәм "төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теле бер бөтөндөң - башҡорт халыҡ-һөйләү теленең айырылғыһыҙ бер өлөшө, үҙ аллы төньяҡ-көнбайыш диалекты булып тора" тигән ныҡлы һығымтаға килә. Автор тикшерелгән диалект составында дүрт: ҡариҙел, танып, ғәйнә, түбәнге ағиҙел һөйләштәрен билдәләй. С. Ф. Миржанова шулай уҡ, үҙ аллы диалектты тәшкил итеүсе төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының "урындағы диалект телен белеүсе һәм үҙ-ара шул телдә һөйләшеүсе" татар һәм фин-уғыр халыҡтары телдәре менән бәйләнештә йәшәүен һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәүсе татарҙарҙың телен "үҙендә үҙ һөйләштәренең диалект үҙенсәлектәрен генә түгел, ә "тәү сиратта башҡорт халыҡ һөйләшенең һәм фин-уғыр телдәренең айырым һыҙаттарын йөрөтөүсе" ҡатнаш һөйләш тип квалификацияларға кәрәклекте һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Шулай итеп, Ж. Ғ. Кейекбаевтың атап үтелгән мәҡәләһе донъя күргәндән һуң өс тиҫтә йыл үткәс кенә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле ниндәй булыуы мәсьәләһенә нөктә ҡуйыла. С. Ф. Миржанованың тикшеренеүе, "Башҡорт теленең көньяҡ диалекты" монографияһы кеүек үк, башҡорт диалектологияһы өлкәһендә эшләүселәрҙең өҫтәл китабына әүерелде.

### Диалекттарҙың заманса классификацияһы

Әйҙәүсе диалектологтар берҙәм таныуынса, хәҙерге башҡорт телендә өс: көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар айырымлана. Уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында үткәрелгән тикшеренеүҙәр барышында был диалекттар составында яңы, элек билдәләнмәгән йәки ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында иғтибарға алынмаған территориаль һөйләштәр ҙә асыҡлана.

1999 йылда, юғары уҡыу йорттарының башҡорт филологияһы бүлексәләре һәм факультеттары студенттары өсөн "Башҡорт диалектологияһы" дисциплинаһы буйынса программа әҙерләгәндә, башҡорт теленең диалекттар системаһының яңыртылған классификацияһын төҙөү проблемаһына юлыҡтыҡ. Бында нигеҙ итеп, тәү сиратта, теге йәки был аныҡ диалект йәиһә һөйләште махсус өйрәнеүгә арналған монографик хеҙмәттәрҙе алдыҡ. Шулай итеп, көнсығыш диалект составында Н. Х. Мәҡсүтова биш һөйләште: әй, мейәс, ҡыҙыл, арғаяш, һалйот (салйоғот) һөйләштәрен билдәләй. Уға беҙ алтынсы территориаль - асыуҙы йәки учалы һөйләшен - өҫтәнек. Үҙенсәлектәре буйынса оригиналь был һөйләш - Учалы районындағы башҡорт типтәрҙәренең һөйләү теле. Ул ҡасандыр Ә. Ә. Юлдашев тарафынан "Типтәр һөйләше" (1950 й.) тигән кандидатлыҡ диссертацияһында ентекле тикшерелеп, һуңынан бер сәбәпһеҙгә башҡорт диалектологтары тарафынан онотолоуға дусар ителә.

Көньяҡ диалект составында С. Ф. Миржанова өс территориаль һөйләште билдәләй: эйек-һаҡмар, дим һәм урта һөйләштәр. Әммә артабанғы тикшеренеүҙәр нигеҙендә был киң диалект зонаһы территорияһында шулай уҡ егән, өршәк, ырғыҙ-кәмәлек һөйләштәре лә булыуы асыҡлана. Урта Урал башҡорттарының һөйләше лә кандидатлыҡ диссертацияһы темаһы булараҡ өйрәнелде. М.И.Дилмөхәмәтов үҙенең был темаға арналған хеҙмәтен айырым монография итеп баҫтырып сығарҙы. Урта Урал башҡорттары һөйләшенең башҡорт һөйләү теле системаһы классификацияһында үҙ урынын табырға тейеш булыуы аңлашыла. Әлбиттә, ошондай планда: М.И.Дилмөхәмәтов тикшергән төньяҡ зона ғына айырым Урта Урал һөйләше булып танылырға тейеш, сөнки был ареалдың көньяҡ зонаһы, тикшеренеүсенең үҙе үк таныуынса, көнсығыш диалекттың әй һөйләше һөйләшсәһе булып тора. Төньяҡ зона, тимәк, барлыҡ үҙенсәлектәре буйынса, айырыуса фонетик үҙенсәлектәр йәһәтенән, төньяҡ-көнбайыш диалекттың үҙ аллы Урта Урал һөйләше тип билдәләнә. Өс диалект беҙҙә барлығы тиҫтә ярымдан артыҡ территориаль һөйләш һәм шунса уҡ һөйләшсәне үҙ эсенә ала.

Һөйләштәр һәм һөйләшсәләребеҙҙең күп булыуына аптырарға ярамай. Сөнки башҡорттар этник планда ла шундай уҡ ҡатмарлы составлы милләт. Уларҙың иң ҙур ҡәбилә берләшмәләре генә 40-тан ашыу.

Ошо урында С. Ф. Миржанованың төньяҡ-көнбайыш диалект һәм уның һөйләштәре мәсьәләһендәге ҡарашының хаҡлы булыуын раҫлаған эштәрҙең береһенә туҡталып үткем килә. 2008 йылда М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында минең аспиранттарымдың береһе, Борай районы ҡыҙы Земфира Зәйнәшева Дүртөйлө, Бөрө, Борай, Балтас, Тәтешле, Яңауыл һ.б. төньяҡ районданда таралған, үҙенең туған төньяҡ-көнбайыш диалектының танып һөйләшен өйрәнеп, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы һәм танып һөйләшенең боронғо башҡорт теленән башланғыс алыуы турыһында ҡыйыу һығымта яһаны. Танып һөйләшендә Дәште Ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең вариҫтары булған боронғо башҡорттарҙың һәм Урал-Волга буйҙары халыҡтарының теленә хас бик күп фонемалар һаҡланған, тип раҫлай З. Ф. Зәйнәшева.

Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ, танып һөйләше Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың, шулай уҡ КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының элекке беренсе секретары Зыя Нуриевтың атаәсәһенең һәм ауылдаштарының һөйләү теле булып тора. Бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич, билдәле ғалим-филологтар Ҡ.З. Әхмәров, М.Х. Хәйруллина, Ә.И. Харисов, медицина фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Лена Мырҙа ҡыҙы Карамова, атаҡлы башҡорт драматургы Ф.М. Бүләков һ.б. - ошо һөйләш вәкилдәре.

### Уның ысулы нигеҙ итеп алына

Башҡорт диалектология фәне ярты быуат эсендә ауыр һәм ҡатмарлы юл үтә. Был юлда юғалтыуҙар ҙа, табыштар ҙа бар. Әммә иң мөһиме, ниһайәт, элек хәл итеп бөтөлмәгән проблемаларға, шул иҫәптән төньяҡ-көнбайыш диалекты буйынса ла, яуап табылды. Был мәсьәлә лә диалектологтар артабан, бик ныҡ һуңлап булһа ла, башҡорт теленең өсөнсө диалекты буйынса үҙ аллы позиция билдәләй алды. Жәлил Кейекбаев тарафынан тәҡдим ителгән диалекттар һәм һөйләштәр классификацияһы, дөйөм алғанда, ашығыс булып сыҡты. Шуға ҡарамаҫтан, арҙаҡлы ғалимдың мәҡәләһе башҡорт диалектология фәнен үҫтереүҙә мөһим роль уйнаны. Эш шунда, уға тиклемге телселәрҙән айырмалы рәүештә, Жәлил Кейекбаев диалекттарҙы өйрәнеүҙең комплекслы ысулын тәҡдим итте. Бында телдең фонетик, морфологик, лексик билдәләренән сығып ҡарау талап ителә (был ысул буйынса башҡорт телендә диалекттар бер-береһенән һәм әҙәби телдән нигеҙҙә фонетик һәм морфологик билдәләр, ә һөйләштәр - фонетик һәм лексик билдәләр буйынса айырымлана). Жәлил Кейекбаев тарафынан эшләнгән ысул бөгөн башҡорт диалекттары һәм һөйләштәрен өйрәнгәндә нигеҙ итеп алына. Был ысул төньяҡ-көнбайыш диалекттың башҡорттарҙың һөйләү теле системаһындағы урынын асыҡлағанда ла ҡулланылды. Башҡорт фәненең һабаҡ бирерҙәй биттәренең береһе шундай. Һүҙемде йомғаҡлап, үҙ уҡытыусыларына тоғро булған, әммә шул уҡ ваҡытта белем эстәүҙең икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙендә үҙ юлын һала алған уҡыусылар ғына оло хөрмәткә лайыҡтыр ул, тип әйтмәксемен.

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА, филология фәндәре докторы:** Мин Пермь өлкәһендә ике-өс тапҡыр экспедицияла булдым. Ундағы халыҡ *с, ч* өндәре менән, "бармаға, китмәгә, күрденме, исәнләшмәгә" тип, үҙ диалектында һөйләшә, "беҙ бит башҡорттар", тип торалар. Йәки Ҡариҙел, Яңауыл, Асҡын райондарын алайыҡ. Төбөнә тиклем яндырылған башҡорт ауылдарынан сыҡҡан халыҡ үҙенең тамырҙарын, башҡорт икәнлеген иҫенән дә, аңынан да сығармаған ошоғаса. Ер барыбер халыҡтың рухын һаҡлай шул ул. Теле үҙгәрһә лә, ошо ерҙең һауаһын һулауы, ошо ерҙең тәбиғәте, ошо ерҙе эшкәртеүе, йолалары, холоҡ-ҡылығы барыбер башҡортлоғон белгертә уның. Шуға ла күберәк халыҡ араһында йөрөргә, уны тыңларға, фольклорын өйрәнергә кәрәк. Беҙҙең институтта әле Борай, Яңауыл райондарында йәшәгән башҡорттарҙан йыйылған фольклор материалдары ята. Шуларҙы өйрәнгәндә лә был асыҡ сағыла: халыҡты барыбер ҙә боронғо үҙаңынан айырып алып булмай, ул уның ҡанына һеңгән, теле үҙгәрһә лә, ул ҡурайға, атҡа, башҡорттоң йәшәйеш үҙенсәлегенә, кейеменә битараф түгел.

**Сынтимер БАЯЗИТОВ, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары:** Былдай конференциялар уҙғарылыуы ғалимдар, диалектологтар, телселәр, ошо проблемаларҙы өйрәнеүсе башҡа белгестәр өсөн бик файҙалы тип уйлайым. Шулай булғас, унда ҡабул ителгән ҡарарҙар алда торған оло бурыстарҙы хәл итеүгә ярҙам итәсәк. Конференцияла ҡаралған факттарҙың, ғилми һүҙҙең теге йәки был территорияла йәшәгән халыҡтарҙың милләтен, тамырҙарын асыҡлауҙа ла ярҙамы тейеренә инанам.

**Эрнест ИШБИРҘИН, филология фәндәре докторы:** Конференцияның әһәмиәте бик ҙур, сөнки бөгөн башҡорт диалектологияһы бер ерҙә лә өйрәнелмәй тиерлек. Элек Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡорт диалектологияһы һәм тел тарихы буйынса бүлек була торғайны. Хәҙер урындағы диалектологтар баҡыйлыҡҡа күсеп бөттө, ә йәш белгестәр юҡ. Беҙҙең тел диалекттарға бик бай. Шуны өйрәнмәйенсә, телебеҙҙе, бигерәк тә әҙәби телде үҫтерә алмабыҙ. Шуға күрә уҡыу йорттарының береһендә диалектология бүлеге асыу иң әһәмиәтле проблемаларҙың береһе булып тора.

**Зәбирә ШӘРИФУЛЛИНА, Өфөләге 116-сы мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Ысынлап та, әҙәби телдә һөйләшеп, уға мөкиббән китеп, үҙебеҙҙең ырыу, ҡәбилә, ауыл, диалект һөйләш телен онотабыҙ. Ә бит тап шул һөйләш, диалект теле аша донъяны танып белергә өйрәнәбеҙ. Хатта диалект теле буйынса теге йәки был кешенең ниндәй төбәктән булыуын асыҡларға мөмкин. Сит-ят яҡтарҙа йөрөгәндә лә, баш ҡалала ла теленә иғтибар итеп, үҙ яҡташтарыңды табаһың. Һәр кемгә үҙ һөйләше, үҙ диалекты матур тойолалыр ул. Диалекттар бер-береһенән айырылып тора, улар шул тиклем төрлө-төрлө, әммә был, мин башҡорт түгел, тиергә нигеҙ бирмәй. "Башҡорт" тигән гөлләмәнең төрлө сәскәләре улар - диалекттарыбыҙ, тиер инем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**




Әфтәх бабайҙы туберкулез диспансерына тиҙ ярҙам машинаһында килтерҙеләр. Һуғыштан ҡайтҡас, ауыл көтөүен көттө ул. Таң һарыһынан, ҡояш ҡалҡыр-ҡалҡмаҫтан уянырға гәҙәтләнгән шуға ла. Тауҙан тауға артылып, гүйә, ул мал артынан бармай - яңы офоҡтарҙы аса. Һәр бейеклек артында монар һымаҡ һуҙылып ойоп ҡына яңы донъя, мөғжизә ятҡан кеүек тойола ине уға. Тирә-яғын балҡап тора ла, күкрәгенә тулышҡан нурҙы һулҡылдатып тышҡа бөркә. Таштар йәнләнеп, күҙ алдары йәйғор төҫтәре менән балҡый башлай шунан.

Һә-әй, үтә шул ғүмеркәйҙәр... Бирешмәгән дә булыр ине, әбейе үлеп ҡуйҙы. Ҡалалағы ҡыҙы, үҙҙәренә барып йәшәргә күндерә алмағас, тәүҙә йыш-йыш ҡайтҡылай ине. Аҙаҡ, ни хәл итәһең, уның да үҙ донъяһы, һирәкләне. Бына шунда һиҙҙерҙе үҙен һуғыш касафаты. Боҫоп ятҡан йылан. Сәңке башын ҡалҡытты ла, үпкәһен имә башланы. Быуылып кәркелдәүгә нисек тә түҙер ине ул, сәсәгәндә ауыҙын баҫҡан ҡулъяулыкта ҡып-ҡыҙыл ҡан тамсылары котон осорҙо. Ҡан, әйтерһең, уның хәтерендә ятҡан ҡанлы биттәрҙе аҡтарҙы, бәгер итен телде... Һуғыш яланында үҙен ҡосағына алам тип ынтылған Әжәлдең ҡанлы күҙҙәренең зәһәр ялтырауын күргәндәй булды ул ошо ҡан тамсылары аша.

...Ун ете йәшендә алдылар Әфтәхте фронтҡа. Бер ай учебка үткәндән һуң, туп-тура ут эсенә юлланылар. Бәхетһеҙлек шунда уҡ янап торған: тотош дивизия фашистар ҡамауына ҡалды. Генералдар, кораблдән ҡасҡан ҡомаҡтарҙай, самолетҡа ултырып, ҡамауҙан ысҡынды. Командирҙар сараһыҙҙан погондарын йолҡа, документтарын яндыра башланы. Танкылар яна, ер яна, мәйеттәр яна. Әфтәх уҡшый, төкөрә, ауыҙы тулы ҡан... Ҡолағы ишетмәй. Үлем уға ҡан еҫе менән килә. Өҫтөнә яуған мина ярсыҡтары аҡтарған тупраҡ та үҙенә үлемдән ебәрелгән ҡарағош кеүек ҡаҙалды. Тик йәнен ала алманы. Шунан контлагерь тотҡоно. Ҡаҡ һөлдәгә ҡалдырып, күҙҙәренең нурын, йәшәүгә өмөтөн һүндерә алмаған тамуҡ. Үпкәһен серетеүсе туберкулез. Инглиздәр ҡотҡарҙы уларҙы. Бөйөк Еңеүҙе ул Англияла ҡаршыланы. Ҡайтҡас, Алыҫ Көнсығышта ике йыл хеҙмәт итте, үпкә сиренән госпиталдә ятып дауаланды.

Ауылда "Пленник!" тип йөҙөн йыртыусылар ҙа табылды. Хатта бер нисә йыл рәттән кемдәндер ҡотҡоһо менән ауыл клубында үткән Еңеү көнө байрамына ла саҡырманылар. Башын баҫып эшләп тик йөрөнө. Кәләшһеҙ ҡалманы шулай ҙа. Күрше районда йәшәүсе апайына ҡунаҡҡа барғанда енел һөйәкле, ҡуңыр йөҙлө Санияны күреп ҡайтты ла ипләп кенә күрше еңгәнең ҡолағына төшөрҙө. Хәбәр тиҙ арала апайына барып етте, тегеһе ҡыҙҙы үҙ яғына ауҙарҙы. Риза булды, Әфтәхте аҙмышы тип ҡабул итте Сания. Ишле ғаиләнән ине ул. Атаһы һуғыштан ҡайтмағайны.

Улы Әхмәттең малайҙар менән ҡанға туҙғансы һуғышып ҡайтыуын хәтерләй. Иманын уҡытырға әҙерләнгәйне: "Әйтмәһендәр, "пленник балаһы" тип әйтмәһендәр", - тип илап ебәрҙе гәрлегенән. Шунда үҙе лә күҙенә йәш алғайны. Үҙем теләп бирелмәнем, гәйебем юҡ, әсир төшөүем минең ҡурҡаҡлыҡтан түгел, тип аңлатты улына. Аңланымы бала, юҡмы... Әхмәттең тос йөҙрөгөн танып өлгөргән малайҙарҙың да өнө тыңланды. Әхмәт әрһеҙ үҫте. Командир булырға хыялланды. Хеҙмәт итергә китте лә, Алыҫ Көнсығышта торҙо ла ҡалды. Мәрйәгә өйләнде. Бер генә бөртөк ҡыҙҙары Сәлиә Сибайҙа йәшәй. Кейәүе - таусы.

...Элек ҡылғанлы дала йәйрәп ятҡан ошо ерҙә гөрләп ҡала үҫеп сығасаҡ, тиһәләр, һөйләмә бушты, тиер ине. Әле бына һуңғы ҡырҡ йылда ҡалҡҡан ҡаланы тәүләп күреүе. Әфтәх ҡарт больница тәҙрәһе аша бейек-бейек ҡупшы йорттарға хайран ҡалып баҡты. Шәфҡәт туташы:

- Ҡыҙыңдың адресын бир әле, олатай, - тигәс, түш кеҫәһенә тығылып, ҡағыҙ киҫәге сығарҙы.

- ...Сәлиә мин тип ауылға ыҙалап ҡайтып йөрөмәһен, - тигән булды ул гәйепле төҫ менән.

Бына шәфҡәт туташы оҙон ҡолғаға аҫылған шешәнең осондағы энәне ҡарттың беләгендә бүртеп торған ҡан тамырына ҡаҙаны. Энәне, әйтерһең, уның йәненә ҡаҙанылар. Ҡарт сытырҙатып күҙен йомдо. Үҙе көткән сикәнес үлем тап ошо энә осонда эленеп торған кеүек тойолдо уға, керпектәре ҡурғаштай ауырайҙы, тәне бер ҡауырһынға әйләнде лә сөмбәйгә һөйрәй башланы.... Әммә был тойғо яйлап икенсеһе менән алышынды. Шешәнән, гүйә, тере тамсы аҡты, яйлап ҡына тәненә һут йүгерҙе, сикәләре яныуын, табандары йылынып китеүен тойҙо. Ҡыҙыңа хәбәр итербеҙ, тигәйнеләр. Уныһы өтәләнеп килеп еткән булыр...

Шәфҡәт туташы энәне тәненән һурып алып, беләген мамыҡ менән ҡуша бөгөргә ҡушҡас, стенаға боролоп ятып, иҙрәп йоҡоға талды.

* * *

Тиҙ теремекләнде ҡарт. Тәҙрә төбөндә оҙаҡ ҡына баҫып тора башланы. Тышта күҙҙе ҡыҙҙырып емелдәп ятҡан ҡарға, бәҫ ҡаплаған ағастарға тәү күргәндәй итеп текләне. Бер-берһен уҙып осҡан турғайҙарға һоҡланыу менән баҡты. Ҡояш нурҙарының һүренке йылыһынан ҡәнәғәтлек кисерҙе.

Карауатынан тормай аунаған ир үҙе әйтмешләй "ментурала" эшләгән. Асыуы ҡайнап тора, кем килеп төртөлһә лә, ҡысҡыра, аҡырына башлай. Бигерәк тә тимер рәшәткә артында ултырғандарҙы ене һөймәй. "Атып бөтөрәм уларҙы, заразы таратыусы ҡороткостарҙы", - тип тештәрен шығырҙата. Ауырыуҙы шуларҙан йоҡторҙом, ти. Ә был яҡта ятҡан әҙмәүер бында ҡышларға тип килгән. Фатирыма ярты йылға кеше индерҙем, ти, үҙе иҫерткесте һемереп ята. Әфтәхтең һулаҡай күршеһе бөтөнләй өйһөҙ. Тажикстандан күстек, ти. Быуылып йүткерә. Уң яҡтан бер йәш егет урын алған. Биш йыл ултырып сығырға өлгөргән. Шау һөйәк, бахырың. Ҡолағына нимәләр тығып тыңлай. Күңеле булһа, ҡулдарын болғап, ҡыйшанлап та ала.

Йәштәр... Еүеш танауҙар, тиер инең, кисә генә арғы койкалағы егеттең шәм кеүек һүнеүенә шаһит булды. Бер сәғәт эсендә үпкәһен ҡосоп бөттө. Һин дә мин ине. Күҙен асып ниңә тынып ҡалды икән, тип әйләгәйне ҡарт, быяла күҙҙәрҙә Әжәлдең зәһәр йылмайыуын күргәндәй булып, артҡа сигенде. Сирҡанып, күҙҙәрен сытырҙатҡансы йомдо. Ҡытыршы усы менән егеттең бәбәктәрен һыпырҙы. Санитарҙар дөбөр-шатыр йүгереп килеп ингәндә, ҡарт ауыҙ эсенән нимәлер мөңгөрҙәп уҡый ине. Доға булдымы ул, әллә былай ғына һөйләнеүе инеме? Бына шул еүеш танауҙарҙы, донъя күреп, Иҙел кисмәгәндәрҙе лә аямай Әжәл. Ваҡыты етһә, китә лә бара кеше.

Әфтәх ҡарт яйлап коридорға сығып ултырырға, ундағы кешеләрҙе күҙәтергә лә күнегеп китте. Ауыҙҙарын сепрәк кеүек нәмә менән бәйләп йөрөйҙәр бындағы шәфҡәт туташтары. Ҡурҡаларҙыр. Улай тиһәң, шуларҙан Зоя тигән бер һылыу сирле егеткә ғашиҡ булып, кейәүгә сыҡҡан, тип тә һөйләйҙәр.

"Аҙна аҙағында алып ҡайтырбыҙ, атай, мунса инерһең рәхәтләнеп, тигәйне ҡыҙы. Бөгөн кесаҙна ғына", - тип уйланы ул эстән. Теге ҡыҙыҡ ҡарт, Сканворд ҡарт, тиҙәр үҙен, коридорҙағы диванға ҡунаҡлаған. Нисәмә ҡарама - ҡулында гәзит тә ҡәләм. Нимәнәлер иҫәпләй, сығара. Әфтәх яйлап ҡына Сканворд янына килеп ултырҙы. Уның нимә менән мауығыуын белергә теләгәндәй, яҡыныраҡ шылып, ҡағыҙына күҙ төшөрҙө. Яйлап ҡына һүҙ башларға ине иҫәбе.

- Көндәр ҙә аҙға тарта, ахыры, Ҡояштың нуры яман, - тигән булды.

Тегеһе ҡулындағы ҡағыҙынан айырылмай ғына коридорҙа ҡапыл пәйҙә булған тауыштарға, оҙон-ҡыҫҡа һындарға ымланы:

- Ҡара әле һин уны, закон да юҡ, шурт та юҡ уларға, нисек кенә ҡыланмайҙар, - тине бер аҙға ҡулындағы ғәләмәтен дә онотоп.

Бына һонтор егет яурынына келәм йөкмәп, өҫөнсө палатаға инеп китте. Икенсе берәүһе ҡара ҡумта күтәреп индерҙе. Коридорҙағылар, был ни ғәләмәт булды, тигән шикелле муйындарын һоноп күҙәтте: палатаға йәнә бәләкәй генә ҡумталар ҙа, быяла һауыттар ҙа ташылды. Шар асыҡ торған ишек аша келәмдең иҙәнгә йәйелеүен, ҡумтаның йәтешләп өҫтәлгә ҡунаҡлауын шәйләнеләр. Сканворд ҡарт телен шартлатты:

- Вәт әй, бында ла йәшәһәләр йәшәйҙәр бит. Байҙар бар урында ожмахҡа әйләндерә ала, - бармаҡтарын шығырлап торған ҡағыҙ аҡсалар тотҡандағы кеүек бер-береһенә ыуғылап алды. - Бөтәһе лә һатыла!

Әфтәххә ҡыҙыҡ ине. Оҙонса буйлы, ас яңаҡлы егеттең өтәләнеп йөрөп донъя бөтәйтергә тырышыуы, үҙен ер кендеге кеүек хис итеп, бер туҡтауһыҙ кеҫә телефонынан һөйләшеүе... Ә иң әкәмәте - бая ғына улар индергән ҡара ҡумтаның мең төрлө йәйғор төҫтәрендә балҡып ултырыуы ине. Донъя тап үҙенең төҫтәре менән балҡый, хатта ҡәҙимгенән саҡ ҡына сағыуыраҡтыр ҙа, бәлки. Ҡарт шул балҡышҡа, төҫтәргә арбалып, үҙенең нисек шул палатаға ингәнен, ишек төбөндә ултырған йомшаҡ креслонан урын алғанын һиҙмәне лә хатта, ауыҙын асып, шул мөғжизәгә текәлде... Төҫлө телевизор тигәндәре шул булалыр, күрәһең. Ишеткәне бар, ләкин бер ҡасан да күргәне юҡ ине телевизорҙың төҫлөһөн. Мөғжизә икән!

Ыуыҙ үлән кеүек йомшаҡ келәмдә иҙәнгә йәйгән, суҡынғыр. Шул ваҡыт ҡарттың күҙ алдында бер нәмә ялт итте. Ысын, ысын, ҙу-ур ҡомаҡ әллә ҡайҙан килеп сығып, теге малайҙың тәпешкәнен әләктереп алды. Ах, йота, ҡәһәрең, тигән уй телеп үтте ҡарттың мейеһен. Әллә ҡайҙан уянған бер ҡөҙрәт иҙәндә ятҡан гантелгә йәбештерҙе лә йән көсөнә шул уҫлаптай тимерҙе теге йыртҡысҡа елгәртте. Барып тейҙе ул имәнес йәнлектең ҡаҡ маңлайына. Ап-аҡ эсен күрһәтеп тәгәрәп китте мәхлүк, йомшаҡ тәпәйҙәре генә тартышып ҡуйҙы, ауыҙы ситенән урғылып ҡып-ҡыҙыл ҡан йүгерҙе.

* * *

Асҡалаҡ яңаҡлы, сәсе тап-таҡыр итеп алынған Сергей был ваҡытта йәнә лә кеҫә телефонына өңөлгәйне. Теге аҙнала ғына ҡайтып төштө ул зонанан. Һүҙҙәрендә торҙо братоктар, иң шәп "аттар"ҙа ҡаршы алдылар, өрмәгән ергә ултыртманылар. Яман сир әләктереүе хаҡында әйткәс, тыныслыҡ, йылы урын буласаҡ, телевизор ҡарап, түшәмгә төкөрөп кенә яңғыҙың бер палатала ятасаҡһың, тип яурынынан һөйҙөләр. Дауалан ғына, сығыуыңа иң шәп "ат" һинең ҡулда буласаҡ, иң матур фатир әҙерләнгән, бөгөндән барып ҡарай алаһың, төшөмлә эшкә йөрөйәсәкһең, тип ышандырҙылар.

Теге ваҡыт, банк талап иткәс, барлыҡ гәйепте үҙ өҫтөнә алғайны ул. Улар өсөн язаһын күтәрҙе, хәҙер, әйҙә, ҡыбырлаһындар! Сергей телевизор ғына ҡарап ятҡыһы килмәй. Шул саҡ ул телефонына үрелде лә ҡатып ҡалды. Төпөш кенә бер ҡарт уның палатаһына инеп, аяғын кирә баҫҡан. Герой тиерһең! Туҡта, нимә ҡарай икән ул унда!

- Сема! - Иҙәндә аунап ятҡан ҡомаҡты күргәс, Ҡолғаның күҙе аларҙы, үҙен-үҙе белмәй, йәнлеккә ҡапланды, устарына һалып, йәнһеҙ икәнлегенә ышанғас, уның ҡанлы ирендәренән үбә башланы. Шунан ҡулында гантель тотоп, бер яҡта аптырап баҫып торған ҡартҡа утлы ҡарашын атты.

-Ҡанһыҙ, фашист, нимә эшләттең һин Семаны? Ул - үлгән! - тип аҡырып илап ебәрҙе.

Ҡарт ҡойолоп төштө. Башын тотоп, креслоға ултырырға итте. Ҡулындағы гантеле тып итеп иҙәнгә төшөп китте. Ҡолға оторо ярһыны, ултырғысты тибеп осорҙо, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ишек төбөндә ятҡан икенсе гантелдә әләктереп, ҡарттың башына елгәрҙе...

Гүйә, күҙ алдындағы мең төҫтәре менән арбап ултырған телевизорҙы һүндерҙеләр, ҡан, баяғы уҡшытҡыс ҡан уның ауыҙ эсенә тулды, ҡолаҡтары буйлап аҡты. Тәне ҡауырһындан да еңеләйҙе лә оҙон коридор буйлап осто. Шунан тағы салт яҡтылыҡҡа юлыҡты. Әбейенең шат йөҙө күҙенә салынды. Арыраҡ әсәйенең, атаһының йөҙҙәре күренде...

Ә Сергей һаман тынысланы алманы, әллә кемдәренә шылтыратып та өлгөрҙө шул арала.

- Нисек аңламайһың, уның менән утты-һыуҙы бергә кистек, икмәкте бергә бүлештек, көндәрҙе, сәғәттәрҙе һананыҡ... Һәм бына, ирекҡә сыҡтыҡ, тигәндә, нисек ҡайғырмаҫһың...- Ирендәрен ул йәнә мәхлүктең ҡанлы ауыҙына тейҙереп алды. Шул ваҡыт, шау-шыуҙы ишетеп, санитарҙар йүгереп килде. Ҡанһырап иҙәндә ятҡан бабайҙың пульсынан тотоп ҡаранылар ҙа, һөйрәтеп, коридорға сығарып һалдылар...

*✓ Унынса, әҙәм балалары наҙанлыҡтары сәбәбенән яманлыҡ, яуызлыҡ юлына баҫһа, ул - бер гонаһлы, ә инде ғилеме була тороп, золомлоҡҡа бирелһә, ул икеләтә гонаһлы.*

АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ

# ШӘМСЕТДИН ЗӘКИ -

## башҡорт далаларының үҙенсәлекле Гомеры


РЕВИЗСКАЯ СКАЗКА.
МУЖЕСКІЙ ПОЛЪ.

**Башҡорт әҙәби фекеренә, Һибәтулла Салиховты иҫәпкә алмағанда, Шәмсетдин Зәки (1822-1865) һымаҡ йоғонто яһаған һәм үҙ осороноң ғына түгел, ә XX быуат баштарында ла әҙәби процеста, йөмәрәтселек фекерендә тәрән эҙ ҡалдырған шәхес юҡ тиерлек.**

### Күңел-батын аша...

Тормош юлын байҡап, уны һәр кем үҙенсә ҡабул иткән: берәүҙәр уны X-XI быуаттарҙа ижад иткән ғәрәп шағиры һәм философы Мәғәрригә оҡшатһа, икенселәр рух ныҡлығы яғынан Алып ише әкиәт батырына тиңләне. Атаҡлы ғалим һәм яҙыусы Ризаитдин Фәхретдинов "Үҙебеҙҙең Физулийыбыҙ" тип ғорурланып, Зәки шиғырҙарын мәшһүр әзербайжан шағиры Физули (1494-1556) ижадына йөнәш ҡуйһа, шиғриәттең нескә лиризмы өсөн Ғ. Туҡай уны "заманындағы шағирҙар араһында Мәрйәм ана" тип атай. Нисек кенә булмаһын, Шәмсетдин Зәки үҙ әҫәрҙәрендә башҡорт ерлеген, үҙ дәүеренең идеологик мөхитен яҡтыртты, шуға күрә уны хаҡлы рәүештә "башҡорт далаларының үҙенсәлекле Гомеры" тип атанылар һунынан. Бер-береһе менән яҡын бәйләнештә тормаған уҡымышлыларҙың һәм ғалимдарҙың үрҙәге фекерҙәрендә бер ғәжәйеп ауаздашлыҡ бар: улар Ш.Зәкиҙе төрлө ҡитғаларҙа һәм халыҡ тарихында лайыҡлы урын билгән боронғо шәхестәргә оҡшата.

Ысынлап та, Ш.Зәки ижадынан боронғолоҡ аңҡый. Урта быуаттарҙағы фарсы һәм ғәрәп телендәге яҙма әҙәбиәттең поэтикаһын, айырыуса идея-тематик йөкмәткеһен милли ерлеккә күсереп, осороноң мәшһүр шағиры булып дан ҡаҙана. Ижад йәһәтенән, Ш.Зәкиҙе алдағы поэтик өлгөләргә эйәреүсе, уларҙы ябай ҡабатлаусы тип әйтеү хата булыр ине. Ғөмүмән, Көнсығыш әҙәбиәттәрендә традицияға эйәреү - ябай ҡабатлау ғына түгел, ә бер үк темаңы һәм образдарҙы, яңы мәғәнәүи биҙәктәр өҫтәп, үҙенсә һүрәтләүгә ҡайтып ҡала. Ш.Зәки ижадында был тенденция эҙмә-эҙлекле һәм тоторокло төҫ ала. Уның сәбәптәренең береһе - тыуымыштан һуҡыр Шәмсетдиндең классик фарсы әҙәбиәте миҫалында шағир булып өлгөрөп етеүелер.

Зәкиҙең тормош юлын һәм ижади мираҫын туплау эшендә ҙур тырышлыҡ күрһәткән ауылдашы З.Мөхәмәтрәхимиҙең теркәүенсә, ун өс йәшлек малай мәҙрәсәлә ҡыш сыҡҡансы, башҡаларға эйәреп һәм бары ишетеү буйынса, сарыф менән нәхеү дәрестәрен, фарсы телен үҙләштерә. Икенсе йылға ул XIII быуаттың данлыҡлы фарсы шағирҙары - суфый Ф.Ғаттарҙың айырым әҫәрҙәрен, Сәғди Ширазиҙың атаҡлы "Бостан", "Гөлбостан" китаптарын яттан уҡый, шулар өлгөһөндә ижади илһам тоҡана үҫмер йөрәгендә. Шиғырҙарында осраған Пәүләүәне Бәһрәми Гүр, Рөстәм образдарының "Шахнамә" китабының геройҙары икәнлеген иҫкә төшөргәндә Шәмсетдиндең бөйөк Фирдәүси ижадын да яҡындан белеүенә шик уянмай. Фарсы поэзияһының иң аҫыл өлгөләрен, үҙе әйтмешләй, маңлай күҙе бирелмәгәс, күңел-батын күҙе аша үткәреп, шундағы образдар диңгеҙенә сума. Бәлки, шуның да һөҙөмтәһендә авторҙың шиғри телмәре йыш ҡына фарсы теләндә, фарсы менән ифрат сыбарланған иҫке төрки телдә яңғырай. Был ғәжәп түгел, сөнки шиғырҙарының рифма, строфа, шиғыр үлсәме кеүек хатта формаль күрһәткестәр буйынса сағыштырғанда ла, XII быуаттың атаҡлы суфыйҙары -төрки телле шағирҙар Әхмәт Йәсәүинең һәм Сөләймән Баҡырғанлыларҙың туранантура йоғонтоһо һиҙелә.

### "...боҙоҡлоҡта ла, изгелектә лә урта юлды тот!"

Шәмсетдин Зәки - шағир-импровизатор, шиғырҙарына ул ниндәйҙер сәбәп менән аралашыу сараһы ла, шәхсән уйфекерҙәрен белдереү формаһы ла тип ҡараған. Мәҫәлән, З.Мөхәмәтрәхими шағирҙың Ҡаҙанда мәҙрәсә хужаһы Мөхәмәткәрим менән тәү осрашҡанда уҡ бәхәскә инеп, ундағы бәхәскә фәлсәфәүи шиғри һығымта яһауы тураһында яҙып ҡалдырған. "Назым" тип баш ҡуйылған был әҫәрҙең йөкмәткеһенән аңлашылыуынса, бәхәстең төп темаһы - шиғырҙы яҙыу-һыҙыу, тексты яҙмаға теркәү булғанға оҡшай. Моғайын, хәҙрәт яңы килгән шәкерттең шағирлығын ишетеп, нисек ижад итеүе менән ҡыҙыҡһынғандыр. Ш.Зәки уға бик ҙур сағыштырыу ярҙамында шиғриәттең яҙыуҙа түгел, ә күңелдә икәнлеген аңлатырға тырышҡан:

Ниндәй ҡайғы булһа ла, һуңынан шатлыҡ була,
Күпме аслыҡ булһа ла, һуңынан ризыҡ була.
Яҡшы ҡолаҡ шулдыр ки: мәғәнәнән һөйөнөс тула.
Хәреф - хикмәт нөктәһен фәһем эйәһенә аңлатыу кәрәкмәй,
Мәғәнәләр диңгеҙенән ләкин наҙандар сафланып ҡала.
Әгәр был сәскәлектең һаман есен һиҙмәһән,
Танауың өҫтөнән яҙ шикәйәт, был, исмаһам, эш була.

Шулай уҡ З.Мөхәмәтрәхими төҙөгән дәфтәрҙә Ш.Зәкиҙең Һ.Салиховҡа ҡыҙын кейәүгә һоратып сығарған (бәлки, яҙҙырған?) хаты, Духовный собраниеға шағир өҫтөнән яҙылған ялыуҙы тикшереүсе Ғәбделҡәүи ахунға ебәрелгән хаттарының тексы бар. Һәр хәлдә, Ш.Зәки үҙенең хаттарының аныҡ шәхескә тәғәйенләнгән ябай хат итеп түгел, ә асыҡ хат икәнлеген бик яҡшы аңлап ижад иткән. Мәҫәлән, ахунға ебәрелгән шиғри хатты ул рисалә тип атай һәм гәзәллек, дин, ышаныу, саф күңел һәм башҡалар хаҡында ҡыҙыҡлы дөйөмләштереүҙәр яһай. Ә инде Әхмәтйән муллаға төбәлгән хатында уның мотлаҡ коллектив алдында ҡысҡырып уҡылыры алдан уҡ тәҫмөрләнә:

"... Эй, һин, тыңла! Һине яныңдағы кешең менән бергә шаһит итеп әйтәм! Һинең яныңдағы кешең һәм һүҙ аңларлыҡ башҡалар менән бергә шаһит итеп әйтәм! Минең был һүҙҙәрем ситтән тороп, ләкин күңел биреп тыңлаусы өсөн әйтелә, ә эргәмдә булып та уларҙы инҡар итеүсе өсөн түгел!" Улай ғына түгел, Ш.Зәки һүҙҙәрен кеше ихтыярын һанға һуҡмай, шәхес азатлығын быуырға, ул һайлаған юлға ҡаршы төшөүселәргә яуап рәүешендә еткерелгән поэтик декларация тип баһаларға мөмкин. Ә уның васыят һүҙҙәре суфыйсылыҡ юлын һайлаған тәҡүәләр өсөн генә түгел, ә барлыҡ әҙәми заттар өсөн дә әһәмиәтле икәне бәхәсһеҙ: "Боҙоҡлоҡта ла, изгелектә лә урта юлды тот, алдан күреүсән аҡыл менән эш ит, үҙең белмәгәндең бөтәһен дә инҡар итмә!"

### "...ғилемде инҡар итеүселәр - бала тапмаҫ ҡатындар..."

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ш.Зәкиҙең шәкерттәр алдында яһаған сығыштары, хөтбә-вәғәҙәренең текстары бер кем тарафынан да ҡағыҙға теркәлмәгән. Стәрлебаш мәҙрәсәһендә буласаҡ шағир Аҡмулла менән әңгәмәләре, сәхрәгә сығып, берберенә уҡыған шиғырҙары, үҙ-ара һөйләшеүҙәренең йөкмәткеһе генә түгел, яҡынса тематикаһы ла беҙҙең өсөн билдәһеҙ. Һәр хәлдә, Аҡмулла яҙып ҡалдырған "нәүбәтләшеп, һәр төрлө әҙәби шиғырҙарҙы әйтеп, эстәребеҙҙе бушатып, күңелдәребеҙҙе күтәреп, шатлыҡ тулып ҡайта инек" тигән иҫтәлеккә ҡарағанда, уларҙың аралашыуы шиғриәт майҙанында барыуы бәхәсһеҙ. Үрҙәге хат тексына ғына ла таянып, шағирҙың иҫ киткес һүҙ маһирлығын, бай мәғлүмәттәр менән иркен эш итеүен, айырыуса образлы фекерләү ҡеүәһен билдәләргә була. Уның оҫта полемиклығы сатира алымдары урынлы файҙалана белеүендә күҙгә ташлана. Мәҫәлән, "Ибраһим бәйғәмбәр - Аристотель һәм Платондың шәкерте ул, тип томана ғына әйтергә мөмкин", йәиһә "ғилемде инҡар итеүселәрҙе" "бала тапмаҫ ҡатындар" менән сағыштырыуҙарҙа ҡаты хөкөм дә, әсе мыҫҡыл да ишетелә һымаҡ.

Шулар һөҙөмтәһендә шағирҙың "фәлсәфәгә өйрәнеүҙән һәм уны өйрәтеүҙән тыйылыусыларға" яуабы, поэтик телмәр формаһын алып, ылыҡтырғыс һәм аһәнле яңғырай. Һуҡыр хәҙрәттең бәләкәй генә Иҙәк ауылында тирмә ҡороп ятҡан еренән йөҙәрләгән шәкерт менән уратып алыныуы, остазы менән уларҙың Стәрлебашҡа күсеүҙәре лә Ш. Зәкиҙең шағирлыҡ, сәсәнлек һәләте өҫтөнә, аҡыллы зат һәм фекер эйәһе икәнен йәнә раҫлай.

### "Хәҡиҡәтте эҙләүсе кафыр..."

"Ғилем, мәғрифәт"хаҡындағы һүҙ Ш.Зәкиҙең "ғариф булыу" теләген асыҡлауҙан башланғайны. Суфыйсылыҡтың шәриғәт, тәриҡәттән ҡала өсөнсө - юғары баҫҡысына күтәрелгән, йәғни Алланан килгән интуитив ғилемгә - мәғрифәткә өлгәшкән кешегә "ғариф" тип әйткәндәр. Һәр ваҡыт изге теләктәр менән, тормоштоң ауырлыҡ-ҡыйынлыҡтарына ҡарамайынса, Аллаға шөкөр ҡылып, Алланың бирелгән таныпы, артабан дүртенсе - хәҡиҡәт баҫҡысына күтәрелеп, Илаһ менән ҡауышырға әҙерләнгән суфыйҙар камил заттар тип иҫәпләнгән. Был дәрәжәләге суфый үҙе башҡаларҙы тасауыф юлынан етәкләүсе шәйех, мөршид була алған...

Шәмсетдин Зәки иһә, үҙен суфый тип атап, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртҡан айырым заттарҙы ярһып фашлай: "ауылдан ауылға йөрөп, мөрит тәрбиәләгән булып, фәҡирҙең кәҙә-һарыҡ вә быҙауҙарына тоҙаҡ ҡороп, һәр барған ауылда бер аҙна тороп, көн-төн белмәй ашап-эсеп ултырған, ҡарын тултырып, грамафун уйнатып... вә йомартраҡ байҙарҙың күңелдәрен аулап, һараныраҡтарының йөҙөн ҡыҙартырлыҡ итеп яманлап, аҡса төшөрҙәй итеп килештереп йәйлап, ыҫпайлап..." йөрөүселәрҙе шағир "мөтәшәйех" тип атай. Шулар кеүек, "башты түбән эйеп, тик ҡорһаҡ хәстәре менән йөрөү тәҡүәлек, диндарлыҡ булһа, ас эт мөтәшәйехтәрҙән ун мәртәбә белеклерәк булыр ине", ти Ш.Зәки. Шағир үҙенең Әхмәтйән Нуриман улы тигән таныш муллаһына яҙған хатында "хәҡиҡәтте эҙләүсе кафыр боҙоҡлоҡ артынан йөрөүсе мосолмандан хәйерлерәк" тигән фекерен юҡҡа ғына белдермәй. Унынса, әҙәм балалары наҙанлыҡтары сәбәбенән яманлыҡ, яуызлыҡ юлына баҫһа, ул - бер гонаһлы, ә инде ғилеме була тороп, золомлоҡҡа бирелһә, ул икеләтә гонаһлы. Ул гонаһтарҙы юйыр өсөн Алла алдында айырыуса тәҡүәлек күрһәтергә,"яҡты, бай һәм камил зат" менән тасауыф юлында тырышлыҡ һалырға кәрәк була, тип иҫәпләй шағир. "Ғариф" төшөнсәһен Ш.Зәки тап ошо юҫыҡтан аңлата:

Йән ҡошо һәр заманда донъя малынан ваз кисер,
Илаһи ғаләмендә осоп йөрөр, осоп китер,
Шул ғариф: кем донъяла ғашиҡ булып терек итер,
Аҡылды шул дәрт менән хайран итер, вайран итер.

**Зәйтүнә ШӘРИПОВА,
филология фәндәре докторы,
БДУ профессоры.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

### БӨРЙӘН ЫРЫУЫ БАШҠОРТО УЛ

Аҡмулланың уҡытыусыһы Шәмсетдин Зәки (Йәрәхмәтов) Таймаҫ волосының Иҙәк утарында тыуған. IV ревизия мәғлүмәттәре буйынса, Иҙәк ауылына 1784 йылда Таймаҫ ауылының ике аҫаба башҡорто нигеҙ һала. VII ревизия материалдарында теркәлеүенсә, 1816 йылда Иҙәк ауылы 9-сы Башҡорт кантонына (Ете ырыу кантоны, Ырымбур губернаһы) ҡарай. Документта бер туған Абделкәрим һәм Фәтҡулла исемдәре бар. Унда шулай уҡ Шәмсетдин Зәкиҙең атаһы Йәрәхмәттең 1797 йылда тыуғанлығы яҙылған. Исемлектә шулай уҡ Иҙәк ауылының башҡа аҫаба башҡорттарын да табырға була - 27 ир-ат һәм 31 ҡыҙ-ҡатын (ЦГИА РБ, ФИ-138. оп.2 Д145 767-се бит.) Иҙәккә Ишмәт ерхкселегендә килмешәктәр күсеп килгәс, ауыл Иҙәк-Ишмәт тип атала башлай. 1850 йылғы документта 31-се йорт старшинаһы зауряд-хорунжий Мөхәмәтйәр Ҡотошевтың (билдәле суфый шағиры Мәнди Ҡотоштоң улы) ҡултамғаһы һалынған. Иҙәк-Ишмәттә казак офицерҙары Шәмсетдин Зәкиҙең ике есаул ағаһының булыуы ауыл халҡының хәрби-казак сословиеһына ҡарауын һөйләй. Ревизия мәғлүмәттәре буйынса, Шәмсетдин 1822 йылда 9-сы Башҡорт кантонының Иҙәк ауылы муллаһы ғаиләһендә тыуған. Ул тыумыштан һуҡыр була. Шәмсетдин Ашҡаҙар-Балыҡлы, Ҡаҙанда Мөхәмәткәрим мәҙрәсәһендә белем ала. Һуңынан ул Таймаҫ ауылында шәкерттәргә белем бирә. Нәҡшбәндиә тәриҡәте юлына баҫҡас, Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡыта башлай.

Беҙ Шәмсетдин Зәкиҙе бөрйән ырыуының аҫаба башҡорто һәм шағир, Аҡмулланың уҡытыусыһы итеп кенә түгел, шулай уҡ Нәҡшбәндиә тәриҡәте юлындағы йөҙҙәрсә суфыйҙарҙың мөршиде итеп тә беләбеҙ. Тап улар, йөҙҙәрсә, меңдәрсә суфыйҙар XX быуат башында үҙ халҡын ойоштороп, III Башҡорт ҡоролтайында Башҡортостан Республикаһын төҙөүгә өлгәшә.

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АЛМА АША ЛА...
## сәләмәт бул, доктор

■ Диабет менән яфаланыусылар грек сөтләүеген йышыраҡ ҡулланып, ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм грек сөтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сөтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып (мәҫәлән, 56 грамм грек сөтләүегендә - 400 ккалорий), дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Германияның Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса федераль ведомствоһы аш-һыу әҙерләү өсөн тик таҙа һыу ҡулланырға кәңәш итә. Бының өсөн улар кранды асҡандан һуң 10-20 секунд көтөп торорға һәм шунан ғына һыу алырға ярай, тип белдерә. Һыу краны 4 сәғәттән артыҡ асылмай икән, торбалағы һыу ундағы зарарлы матдәләрҙе үҙенә һеңдерә башлай. Шуға ла кранды асҡас, бер аҙ көтөп тороу сәләмәт булыуҙың бер шарты, ти ғалимдар.

■ Көнөнә бер киҫәк ҡара шоколад ашау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыу хәүефен кәмете, тип белдерә Потсдамдағы Аҙыҡ-түлек институты ғалимдары. Улар һигеҙ йыл дауамында 35 йәштән алып 65 йәшкә тиклемге 20 мең кешене тикшереп, көнөнә 6 грамм ҡара шоколад ашау инфаркт һәм инсульт кисереү хәүефен 27-48 процентҡа түбәнәйтеүен асыҡлаған.

■ Инглиз телендә "Көнөнә бер алма аша һәм сәләмәт бул, доктор!" тигән әйтем бар. Гейдельбергтағы Немец онкологик үҙәге докторы Кларисса Герхойзер әйтеүенсә, алма, ысынлап та, күп ауырыуҙарҙан дауа икән, уның составындағы ҡайһы бер матдәләр хатта яман шеш күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә. Кверцетин пигменты һәм пектин полисахаридтары организм күҙәнәктәренең яңырыуына булышлыҡ итә. Кверцетин алманың ҡабығында ла күп. Шулай уҡ алма һуты ла яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара ала, тик ул тәҫһөҙләндерелмәгән булырға тейеш.

■ Емеш-еләк сәләмәтлек өсөн ни тиклем файҙалы булмаһын, уларҙы йоҡлар алдынан ашарға ярамай, тип иҫкәртә немец ғалимдары. Емеш-еләк составында булған тәбиғи емеш шәкәре инсулин бүленеп сығыуҙы әүҙемләштерә. Әммә инсулин юғары булғанда организм төндә артыҡ майҙар менән "көрәшеүҙән" туҡтай. Тимәк, йоҡлар алдынан ашалған емеш-еләк артыҡ ауырлыҡ йыйырға ярҙам итә.

■ Төнөн эшләргә яратыусылар һәм хеҙмәт урындарында тәүлектең ҡараңғы өлөшөндә эшләргә мәжбүр булыусылар ҙа йышыраҡ һимеҙлек менән яфалана икән. АҠШ-тың Эванстондағы Төньяҡ-көнбайыш университеты ғалимдары быны эксперимент ярҙамында тикшереп ҡарағандан һуң, шундай һығымтаға килгән: тәбиғәт тарафынан ял итеү өсөн тәғәйенләнгән ваҡытта эшләү һәм ашау организмға кире йоғонто яһай. Һөҙөмтәлә ул артыҡ калорияны яндырып өлгөрмәй һәм кеше яйлап һимерә башлай.

■ 18 йыл буйы 47 мең пациентты күҙәткәндән һуң, немец ғалимдары йәйәү йөрөүҙең күп ауырыуҙарға ҡаршы тороуын асыҡлаған. Саф һауала йәйәү йөрөргә яратыусыларҙың йөрәктәре, йөрәк-ҡан системаһы ғына түгел, эсәк-ашҡаҙан сирҙәре лә һирәгерәк борсой.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин тәмәкегә ҡаршы көрәш концепцияһын раҫланы. Был сара тәмәке тартыусылар һанын ике тапҡырға кәметеүгә иҫәп тота. Бысҡытырға яратыусыларға ҡаршы ниндәй саралар ярҙамында көрәшергә йыйыналар һуң? Һүҙ ошо хаҡта.**
**Тәмәкеселәрҙе ҡыйынлыҡтар көтә. Дәүләт Думаһына Яңы йылға тиклем үк йәмәғәт урындарында тартыуҙы тыйыу тураһында, шулай уҡ тәмәке продукцияһына акциздарҙы арттырыу һәм тартҡан өсөн штраф түләтеүҙе ҡәтғиләштереү хаҡында закон башланғыстары индереләсәк. Тәмәкегә ҡаршы концепцияның төп бурыстарының береһе - 2015 йылға илдә тәмәке ҡулланыуҙы 10-15 процентҡа кәметеү. Бынан тыш, документта күрһәтелгән сараларҙы бойомға ашырыу пассив тартыусылар һанын 4 йыл эсендә 30 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирәсәк. Бөгөн рәсәйлеләрҙең 80 проценты тәмәке төтөнө тәьҫирендә йәшәй.**



# ЯҠШЫ БУЛЫРМЫ, ӘЛЛӘ...
## һәр ваҡыттағыса, Рәсәйҙәге кеүекме?

### Сара төрҙәре

Концепцияға ярашлы, 2015 йылға тиклем илдә йәмәғәт урындарында тартыу тыйыласаҡ. Улар иҫәбенә мәғариф һәм медицина учреждениелары, дәүләт власы органдары бинаһары, йәмәғәт ашханалары һәм халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеүсе (шул иҫәптән күңел асыу хеҙмәттәре) башҡа төр ойошмалар инә. Ресторандарҙа, парктар һәм скверҙарҙа, тарихи һәм мәҙәни һәйкәлдәр янында тәтәтеү тыйыласаҡ. Офис биналарындағы тәмәке тартыу бүлмәләре махсус елләтеү һәм һауа таҙартыу ҡоролмалары менән йыһазландырылырға тейеш, юғиһә, уларҙы ла йоҙаҡлап ҡуйыу көтөлә. Йәмәғәт транспортында, шулай уҡ вокзалдар, аэропорттар һәм туҡталыштарҙа тәмәке бысҡытыу мөмкин булмаясаҡ.

Конвенцияның тағы ла бер аҙымы булып 2015 йылға тәмәке изделиеларына акциздарҙы арттырыу тора. Был иһә, һис шикһеҙ, әлеге продукцияға хаҡ артыуға килтерәсәк. Киләһе йылдан тәмәке ҡаптарының тышында ялған мәғлүмәт биреү тыйыла. Мәҫәлән, сигареттың теге йәки был төрөнә "ультраеңел", "йомшаҡ", "ыҫмалаһы аҙ" тигән һүҙҙәр ярҙамында тауарҙы зарарһыҙландырып күрһәтеү тыйыласаҡ. Тағы ла тәмәке ҡаптары тышына "сейә", "еләк", "алма", "шоколад", "бөтнөк" тип, теге йәки был ризыҡ йә үләндәр менән тинләү рөхсәт ителмәйәсәк.

Ә инде 2011 йылдың аҙағына тиклем үк тәмәкене рекламалау тулыһынса тыйыласаҡ. Бынан тыш, сигарет ҡабында яҙыуҙар менән бергә тәмәкесе үпкәләренең һүрәте төшөрөләсәк.

Әгәр ошо саралар Дәүләт Думаһы депутаттары тарафынан ҡабул ителһә, Рәсәйҙә тәмәке тартыусылар хәле күпкә ауырлашасаҡ. Һәм улай ғына ла түгел, ҡимmәтләнәсәк тә. Тәмәкегә ҡаршы хәҙер инде тиҫтә йыллап барған ватан көрәше, шулай итеп, Европала иң ҡәтғигә әйләнеүе бар.

### Европаға эйәреп

Италияла 2005 йылда индерелгән йәмәғәт урындарында тартыуҙы тыйыу тәмәке тартыуға ҡаршы көрәштең тәүге аҙымы булып тора.

Шотландияла тәмәке тартыу 2006 йылдың мартында, Уэльс һәм Төньяҡ Ирландияла 2007 йылдың апрелендә тыйыла. Францияла шулай уҡ тәмәкегә тыйыу 2007 йылдан индерелде.

Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: әлеге саралар Европала тәмәке һатыуҙы 30 процентҡа тиклем кәметеүгә килтерҙе. Ә Ирландияла бындай тыйыуҙың һөҙөмтәһе итеп сәбәптәренең береһе тәмәке тартыу булған ауырыуҙар һанының 11 процентҡа кәмеүе күрһәтелә.

### Бола күтәрерҙәрме?

Күҙәтеүселәрҙең һүҙҙәренә ҡарағанда, әлеге саралар тупланмаһы башҡа илдәрҙә ҡулланылып, ярайһы ғына һөҙөмтәләр бирә: күп илдәрҙә тәмәке һатыу кимәле кәмене. Ә бына Рәсәйҙә лә шундай уҡ һөҙөмтә булыр, тип ышанырға иртә әле. Бөтә эш сараларҙың нисек ғәмәлгә ашырылыуына бәйле. Әгәр тыйыу сараларына ғына юл бирелеп, халыҡ араһында аңлатыу эштәре ҡағыҙҙа тороп ҡалһа, бынан һәйбәт һөҙөмтә көтөп булмай, әлбиттә. Ҡәтғи тыйыу менән бәйле килеп тыуған тәьҫир һөҙөмтәһендәге тәмәке болалары тарихҡа мәғлүм бит инде. Икенсенән, Европала тәмәке хаҡы ҡиммәт булһа ла, халыҡтың тормош кимәле лә яҡшы бит, шунлыҡтан улар тәмәке өсөн аҡсаһын йәлләмәй ҙә. Ә Рәсәйҙәге ҡиммәтселек бит туранан-тура халыҡ кеҫәһенә килтереп бәрәсәк. Ә был, үҙ сиратында, "итәк аҫтынан" сауҙаға йәки тәмәке үләне үҫтереп ҡулланыуға килтерәсәк.

### Һандар һәм мәғлүмәттәр

- Тәмәке тартыу менән бәйле ауырыуҙарҙан илдә йыл һайын 500 мең кеше үлә;
- Рәсәйлеләрҙең 80 проценты көндәлек (пассив) тәмәке тартыу йоғонтоһона дусар;
- Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 40 проценты ауырлы ваҡытта тартыу һөҙөмтәһендә, тыумыштан сирле балалар һаны арта.

### Кәңәштәр

- Тыйыу саралары халыҡ араһында тәмәкенең зыяны хаҡында киң аңлатыу эштәре менән бергә башланырға һәм алып барылырға тейеш. Тәмәке тартыусыларҙың аңында һынылыш булмай тороп, ниндәйҙер һөҙөмтәгә өмөт итеүе ҡыйын.
- Тәмәкеселәр өсөн махсус тартыу бүлмәләре булдырырға.
- Тыйылған урындарҙа тартҡан өсөн штраф күләмен 10 тапҡырға арттырырға.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ

# ШИФАХАНАЛАРЫБЫҘ - ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ

Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә Башҡортостаныбыҙ һәр йәһәттән яңырыу осоро кисерҙе. Ыңғай үҙгәрештәр иң тәүҙә халыҡтың эш һәм тормош шарттарында ныҡ тәҫмөрләнә. Ә эшләй белгән кеше ял да итә белергә тейеш. Элек бөтә ил халҡы фәҡәт Ессентуки, Кавказ минераль һыуҙарына ял итергә һәм дауаланырға бара ине. Суверенитет йылдарында Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғи байлыҡтарын, шифалы сығанаҡтарын кешеләрҙең сәләмәтлеген нығытыуҙа файҙаланыу һәм был эштән килем алыу бурысы ҡуйылғайны һәм ул уңышлы тормошҡа ашырылды. Бөгөн Башҡортостан шифаханаларына, ял йорттарына ҡайҙан ғына кемдәр килмәй! Хатта сит илдәрҙән килеп дауаланалар.

Мәҫәлән, тап ошо һуңғы йылдарҙа Европа кимәленә еткерелеп ер-яңынан төҙөкләндерелгән, зиннәтле ял һәм дауаланыу корпустары менән айырым бер екиәти ҡаласыҡҡа әүерелгән "Красноусольск" шифаханаһы, мәҫәлән, йыһан айҡап ҡайтҡан космонавтарҙың, башҡа билдәле шәхестәрҙең яратҡан ял төйәге булараҡ билдәле. Ә данлыҡлы "Янгантау" һуң? Әйтеүебеҙсә, хатта сит тарафтарҙан таяҡҡа таянып килгән кешеләр үҙ аяҡтарына баҫып ҡайтып китә бынан.

Республикабыҙҙа бөгөнгө көндә 30 санаторий-курорт учреждениеһы эшләй һәм улар бөтәһе лә заманса аппаратура, бөтә төр һауыҡтырыу технологиялары менән йыһазландырылған. Уларҙа йәмғеһе 75 төрҙән ашыу дауалау ысулдары ҡулланыла. Беҙҙең шифаханаларҙа йыл һайын үҙебеҙҙән һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан 120 меңдән ашыу кеше ял итә һәм һаулығын нығыта. Был учреждениеларҙың эш һөҙөмтәһен асыҡ дәлилләп тороусы тағы бер мәғлүмәт: Башҡортостан санаторийҙары даими рәүештә һәр төрлө конкурстарҙа еңеүсе булып килә. "Здравница - 2008" Бөтә Рәсәй форумында улар 11 алтын, 7 көмөш миҙал яулаһа, 2009 йылда - 13 алтын һәм 3 көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ә "Янгантау" иһә ил күләмендә өсөнсө тапҡыр иң яҡшы һауыҡтырыу учреждениеһы исемен яулаған берҙән-бер шифахана.

ЙӘНӘШӘЛӘ...

# ДИҢГЕҘ АРЪЯҒЫНДА ТҮГЕЛ,

## эргәндә генә бит кумирҙарың



**Кумирҙарҙы ситтән эҙләмәйек. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған йәки Еңеү яулап ҡайтҡан атай-олатайҙарыбыҙ, тыл хеҙмәткәрҙәре, тормош ауырлығына зарланмай ишле ғаилә ҡорғандар, герой-әсәләр - улар ҙа көн һайын шоу-программаларҙа ялпылдаған "йондоҙҙарҙан" кәм түгел.**

Мәктәптә уҡыған йылдарҙа анкета тултырыу модала ине. Анкета хужаһының тиҫтәләгән һорауына һәр кем үҙ яуаптарын яҙа, иҫтәлек өсөн һүрәттәр төшөрә. Һорауҙар ябай: үҙең менән таныштырыуҙан башлап, яратҡан төҫөңә, ашыңа, йырсыңа, кумирыңа тиклем "төпсөнә" анкета авторы. Тап бына ошо кумирҙар иҫемә төштө бөгөн. Анкета тултырыусылар һаны күп булһа ла, кумирҙар төрлөлөгө менән бай түгел. Малайҙар өсөн ул - Арнольд Шварценеггер, ә ҡыҙҙар Бритни Спирс тип яҙалар. Беҙ был кешеләрҙе үҙ күҙебеҙ менән күрмәһәк тә, уларҙың бөйөклөгөнә "зәңгәр экран", ялтырауыҡлы журналдар аша инандыҡ. Уларға оҡшарға тырышып кейендек, улар тураһында тапшырыуҙар ҡараныҡ, журналдан фотоһүрәттәрен йыйҙыҡ.

Китап-дәфтәрҙәр тулы шкафты йыйыштырғанда шундай анкетаның береһе ҡулға килеп эләкте. Мәктәпте тамамлағанға бик күп ваҡыт та үтмәгән, ә барыбер тормошҡа ҡараштар үҙгәргән, кумирҙар ҙа башҡа.

Яңыраҡ үҙемә бөтөнләй бер асыш эшләнем - беҙ бит кумирҙар араһында йәшәгәнбеҙ! Мәҫәлән, тыуған ауылым Әбеттә генә лә күпме улар! Көн-төн һаулыҡ һағында торған Тамара Бикташева; ябай ғына ауыл малайынан яҙыусы йәки ғалим булып киткән Ғәли Ильясов, Тутыя Бикҡужина, Фәнил Күзбәков; шәхси хужалыҡ ойоштороп, ауылдаштарын эш урындары менән тәьмин иткән, йәштәргә торлаҡ төҙөгән Мөхтәр Иҫәнов; ғүмеренең 38 йылын балалар уҡытыуға арнаған Дамира Байназарова; билдәле көрәшсе Әҙһәм Бикҡужин - улар бөтәһе лә йәштәргә өлгө булырлыҡ кешеләр, беҙҙең аралағы кумирҙар.

Картала бер нөктә генә булған ауылымда ошо тиклем өлгөлө кешеләр булһа, районыбыҙҙа, республикабыҙҙа улар - миллион! Әгәр ҙә йәштәр бәләкәйҙән үк эргәһендәге геройҙарҙы белеп, ғорурланып үҫһә, алдына аныҡ пландар ҡуйып, маҡсаттарына ынтылһа, насар булмаҫ ине.

**Резедә КҮЗБӘКОВА.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ДӘҮЛӘТСЕЛЕКТЕҢ ТӘРӘН ТАМЫРҘАРЫ

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында башҡорт халҡының Рәсәй күләмендә үҙаллылыҡ-суверенитет яулап алыу өсөн мәкәддәс көрәшкә күтәрелеүе тиктәҫтән генә түгел - уның нигеҙендә бабаларыбыҙҙың иң боронғо замандарҙан уҡ дауамланып килгән дәүләтселек төшөнсәһе ҡуҙрап ята ине. Ошо ҡуҙрау XX быуат башында "һүнеп барған" Башҡортостанда өр-яңынан ялҡынланып, 1917-1919 йылдарҙа шанлы Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә халҡыбыҙ үҙенең дәүләтселеген яңынан тергеҙҙе һәм 1920 йылда Сөләймән Мырҙабулатов етәкләгән дәһшәтле ихтилалда шуны һаҡлап ҡалыуға өлгәште.

Һуңғы быуат фәнни ҡаҙаныштарына таянып, һис бер ниндәй тартыныуһыҙ, ауыҙ тултырып әйтергә мөмкин: кешелек донъяһының тәүтеле, тәүдине, тәүмифологияһы, тимәк, тәүдәүләт ҡоролошо ла тап ошонда, Уралда - тарихи Башҡортостан тупрағында яралған, был хаҡта мәғлүмәттәр күп, мин уларҙың байтағын, хәлдән килгәнсә бөртөкләп йыйып, китаптарымда һәм интернет биттәрендә биргәнмен. Ҡитғабыҙҙың тәүге дин үҙәге ошо баш ҡалабыҙ Өфөлә булған, тәүге заман мәҙәниәте тирә-яҡҡа тап ошонан таралған. Быны иң боронғо яҙма сығанаҡтар ҙа ҡеүәтләй. Мәҫәлән, "Өфө" исеменең яҙыуҙарҙа сағылышы:

- VI быуат башы ҡытай йылъяҙмаларында тап ошонда башҡорт ҡағаны Ими-Бату йәшәгән Иву (Өфө) ҡалаһы бар; ҡаған тиклем ҡаған торғас, башҡорт дәүләте булған.
- VII быуатта гректар изге дин үҙәге Өфө биналанған тауҙы Рипа (башҡортсанан Үр-Өпә/Үр-Өфө йәғни Өфө үре), Рипей (Үр-Өпәй), Рифей тип яҙғандар; ғөмүмән, Урал тауҙары ла Рифей тип йөрөтөлгән.
- VIII быуат ғәрәп географы Мөхәммәт ибне Муса әл-Хуаризмиҙың "Ер һүрәте" китабында географик координаттары 55 градус 20 минут буйлыҡ (долгота), 52 градус 10 минут арҡау (широта) тәңгәлендә Ауфа-тар-ийа (йәғни Өфө-Тора-өйө - Й.С.) исемле ҡала күрһәтелгән - баш ҡалабыҙ Өфө торған координатҡа тап килә. Китаптың урыҫсаға тәржемәсеһе Т.М.Калинина, беҙҙәрҙе аймылыштырыу өсөнмөләр инде, быны Птолемейҙың 60 градус 45 минут буйлыҡ, 47 минут арҡауҙағы оҡшаш яңғырашлы Евпатория ҡалаһы тип раҫламаҡсы...
- X быуат ғәрәп географы Ибне Һауҡал: өс ҡәүемле Сәрир (Үҫәргән - Й.С.) иленең береһе Болғар иленә яҡын, уның батшаһы Гунаба (йәғни Көн-Аба - Көн-Өфө. - Й.С.) ҡалаһында йәшәй...

Батшаһы булғас, дәүләтле халыҡ, тимәк.

- XI быуат Мәхмүт Ҡашҡариҙың "Төрки телдәре һүҙлеге"нә теркәлгән географик картала үҫәргән-башҡорт ерҙәре һәм ҡалалары, шул иҫәптән тап бөгөнгө урында Иуфин (Өфө) ҡалаһы күрһәтелгән.
- XIII быуат ҡытай йылъяҙмаларында беҙҙең "Кун-вен У-хэ" (Көн убын Өфө) ҡалаһы һәм батшаһы теркәлгән.
- Шул уҡ быуат, итальян Марко Поло китабында Болғар ҡалаһынан көнсығыш тарафта Укака (боҙоп яҙылған Өфөкәй) ҡалаһының барлығы әйтелә, ҡайһы бер урыҫ ғалимдары шуны хәҙерге Саратов янындағы боронғо ҡала Укек менән бутай, ләкин ул ҡала бит Болғарҙың көнсығышында түгел, ә көньяҡ-көнбайышында...
- Ниһайәт, һуңғы йылдарҙа археологтар тарафынан Өфө II ҡалаһының асылыуы быларҙың барыһын кире ҡаҡҡыһыҙ дөрөҫләп, башҡорт халҡының һәм Башҡортостандың тәрән тарихына күҙ йомоп йә ҡул һелтәп ҡараусы иң һәрһәгән нигилистарҙың да байтағының башын шаңҡытып, сафсаталы ауыҙҙарын йомдортто.

Өҙөп кенә әйткәндә, Башҡортостан дәүләтселегенең (суверенитетының) тамыры бик тәрән, уны халыҡ хәтеренән һәм теләгенән йолҡоп ташлау һис мөмкин түгел.

**Йыһат СОЛТАНОВ, яҙыусы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ни өсөн ярлылар хәйерселәнә, ә байҙар тағы ла ныҒыраҡ байый?

Эверет колледжға уҡырға инә, әммә уны тамамлай алмай. Атаһы иң уңышлы йылдарҙа уның уҡыуына өлөшләтә түләү өсөн етерлек аҡса туплаған Кентуккия фермерының улы, университет тамамлағандан һуң ҡабат фермаға әйләнеп ҡайта.Юғары белем алып, ул тупаҫлана һәм үҙенең кемдәрҙәндер кәмерәк булыуына инана.Уның күңелендә был донъя байҙарға һәм ярлыларға бүленеүе, уға һәр саҡ ярлылар араһында ҡалырға яҙғанлығы тураһында ышаныс нығына.Күпмелер ваҡыт ул мәктәп автобусын йөрөтә, әммә бер ваҡыт спиртлы эсемлектәр эсеүе асыҡлана һәм уны эштән ебәрәләр. Шул ваҡытта ул барлыҡ аҡсаһын йыйып, ҡулланылған йөк машинаһы һатып ала һәм фермерҙарға йөк ташый башлай. Уның әсәһе вафат була, бер йылдан һуң атаһы ла яҡты донъя менән хушлаша. Хәҙер уның бар ваҡыты фермалағы эштәр ала һәм йөк ташыуын туҡтатырға мәжбүр була. Хәҙер Эвереттың эштәре нисек һуң? Уның хаҡында бер нәмә лә ишеткәнем юҡ. Хат яҙырға ла аҡсаһы етмәйҙер, тип уйлайым.

**Ярлы кеше матди донъяһының гипноз тәьсиренән тағы ла ярлылана. Кеше уларҙы еңеп сығырына ышанмай.**

Бына Юджин. Ул Нью-Йорктың бай төбәге - Вестчестер округында донъяға килә. Уның атаһы, банк президенты, өйҙә һәр ваҡыт аҡса тураһында һөйләй. Ғаилә үҙе теләгән нәмәне һатып алыу мөмкинлегенә эйә. Юджинды һеңлеһе менән бер нисә тапҡыр сит илгә сәйәхәткә алып сығалар һәм иң яҡшы университетҡа урынлаштыралар.Уҡыу йортон тамамлағас, Юджин атаһын уның банкындағы эшләргә теләмәүе менән хафаландыра. Ул, әгәр теләһә, атаһының ярҙамынан тыш та бай йәшәйәсәгенә шикләнмәй. Шуға ла инвестиция фирмаһына эшкә урынлаша. Ул үҙенең оптимизмы арҡаһында бер-бер артлы клиенттар йәлеп итә. Уның һалған капиталы мөғжизә тыуҙыра. Әйтерһең, ул нимәгә тотонмаһын, шул нәмә алтынға әйләнә.Юджин өйләнеп, Лонг-Айленд утрауында Саутгемптонда йәшәй башлай, ғаиләһендә биш бала тыуа. Атаһы ярҙам итергә тырышып ҡараһа ла, Юджин уның кәңәштәренә ҡолаҡ һалып бармай. Күптән түгел мин уның исемен 500 иң уңышлы кешеләр исемлегендә күрҙем.

**Байҙар тағы ла ныҒыраҡ байый, сөнки матди тормошта сикләүҙәр булыуына ышанмай. Шулай итеп, ярлылыкмы, байлыкмы?**

Друидтар бай була. Сөнки улар байлыкты һайлай, һәм бер тапҡыр һайлағас, быны өсөн нимә эшләргә кәрәклекте белә. Улар бер-береһен өйрәтә, йыш ҡына башҡаларға ла үҙ асылдарының серен аса.

Һәр кешегә уның ғаләмдәге урыны билдәле. Был - тормош башланғандан уҡ һалынған шәхес нигеҙе һәм ул ғүмер ахырынаса үҙгәрмәй. Ярлылар ярлы булып ҡала. Байҙар бай була. Кеше дуҫлыҡ, рәхәтлек, нимәләр алыу йәки аҡса кеүек байлыкты үҙенә тарта ала. Тормоштағы киҫкен боролош - кемделер юғалтыу, айырылышыу, төрмәгә ултырыу - кешенең аң төбөндә ятҡан инанысын теге йәки был яҡҡа үҙгәртергә мөмкин. Әгәр был үҙгәреш ыңғай яҡҡа булһа, уны аң асылыу йәки "икенсе тыуыу" тиҙәр. Японияла быны "сатори" тиерҙәр ине, ә Һиндостанда - "самадхи". Хатта тормоштағы иң ҡырҡа боролош та кешегә тәьсир итеп, уны икенсе тормошҡа, ярлылыҡтан байлыҡҡа алып сыға алмай. Психологтарға кешеләрҙең үҙгәрештәргә ҡаршылашыуы билдәле. Был инертлыҡ, быға тиклем булған тормошҡа һөйөү кешеләр тарафынан яныны хәүеф кеүек ҡабул итеүгә, уны үҙҙәренән ситкә этергә тырышыуға килтерә.

Һеҙ улар кеүек түгел. Сөнки ошо яҙмаларҙы уҡыйһығыҙ. Тағы ла шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ, айыҡ аҡыллы кеше бер ваҡытта ла үҙенә нужа теләмәй, бары тик тормоштағы үҙ маҡсатын тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер аҙымдар яһай.Бына ул аҙымдар. Бер ниндәй тормош боролошо юҡ. Бары тик матур уйҙар.

**Роберт СТОУН.**



## 11 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
10.10 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня-3", 1-я серия. Драматический сериал
00.40 "Фотограф"
02.40, 03.05 "Толстушки"
03.00 Новости
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 04.00 "Старые русские бабки. Никитична - Маврикиевна"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Дворик". Сериал
15.25 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 166-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 6-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Индус", 1-я, 2-я и 3-я серии. Сериал
23.45 "Вести+"
00.05 "Наблюдающий незнакомец". Криминальная драма
01.45 "Дорогой мой человек"
03.55 "Честный детектив"
04.30 "Городок"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Профессия - репортер"
01.45 "Пурпурный дождь"
